ISSN 0869-5008

# АМАНАТ

2010
Февраль








ЯҘЫЛ ДА, БҮЛӘК ОТ!

# “АМАНАТ”ТЫҢ ЙӘН ДУҪТАРЫ – ЙӘНДУҪТА ЙӘШӘЙ




Дүртөйлө районының Иҫке Йәндүҫ урта мәктәбе музейында ауылға нигеҙ һалыусы Ҡаңны ырыуы башҡорто Ишбулаттан башланған ауыл шәжәрәһе ҙур итеп эшләп ҡуйылған. Заманында ҙур һәм бай колхоз үҙәге булған был ауыл мәктәбендә бөгөн эргә-тирәләге ете ауылдан балалар уҡый.

Ауылдың исеме Йәндүҫ та был яҡҡа төрлө халыктар килеп ултыра башлағас барлыҡҡа килгән, тигән тарих бар. Бөгөн мәктәптә урыҫ, татар, башҡорт, мари, инглиз телдәре уҡытылыуы ла бында төрлө халыҡтың берҙәм ойошоп йәшәүе хаҡында һөйләй.

– “Аманат” журналын беҙҙә яратып уҡыйҙар, – ти мәктәп директоры Наталья Гавриловна Камалетдинова. – Тотош синыф менән яҙылыусылар ҙа бар. Тик бына ул турала журналға хәбәр итергә генә оноҡкандар.

Дүртөйлөгә килеүебеҙгә иһә Иҫке Йәндуҫтан 5-се синыф уҡыусыһы Миләүшә Ҡадированың, “Яҙыл да, бүләк от!” конкурсында ҡатнашып, цифрлы фотоаппарат отоуы сәбәпсе булды. Дөйөм линейкала балалар менән әңгәмәлә асыҡланыуынса, был мәктәптә “Аманат”ты алдырыусылар байтаҡ булһа ла, конкурсҡа купонды бер Миләүшә генә ебәргән икән. “Журналда төрлө конкурстар барыуын күреп торабыҙ, артабан уларҙың барыһына ла материалдар ебәрербеҙ инде – еңеүсе лә күҙ алдыбыҙҙа ”, – тип ышандырҙылар беҙҙе Иҫке Йәндуҫта. Ә Миләүшә ауылы тарихы тураһында яҙып, уның матур тәбиғәтен фотоға төшөрөп, “Төйәгем тарихы” конкурсына ебәрергә вәғәҙә итте.



## Уҡытыусы йылындағы беренсе яңы мәктәп

Рәсәй президенты Дмитрий Медведев Рәсәйҙә Уҡытыусы йылы тип иғлан иткән 2010 йылда илебеҙҙә беренсе булып Ғафури районы үҙәге Красноусольск ҡасабаһында өс ҡатлы яңы мәктәп ишектәрен асты. Шулай итеп, 480 бала һәм уҡытыусылар коллективы мәғарифҡа ҙур иғтибар бүлеүҙе төп маҡсат итеп ҡуйған йылды асыу ҡыуанысын иң беренсе булып кисерҙеләр.



Эргәһендә генә парк һәм ҙур стадион булған, белем алыу өсөн барлыҡ шарттары булған мәктәпте асырға Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов, менән мәғариф министры Зиннәт Аллаяров килде.

Һуңғы ун ике йыл эсендә Ғафури районында ғына 12 яңы мәктәп төҙөлгән, бишәүһе реконструкция үткән, тағы ла алтауһына капиталь ремонт яһалған.

Красноусольскиҙа элек мәктәп урынлашҡан иҫке бина уҡытыусылар өсөн фатирҙар итеп үҙгәртеп ҡорола.






## Олимпиада йылында – яңы комплекс

Канаданың Ванкувер ҡалаһында асыласаҡ XXI ҡышҡы олимпиада алдынан Өфөнөң 1-се балалар-үҫмерҙәр олимпия резервы мәктәбе Зорге урамында яңы бинаға күсте. Әйткәндәй, ҡышҡы олимпиадаларҙа Рәсәй командаһы өсөн был мәктәптән дүрт спортсы ҡатнашҡан. Ванкуверға быйыл унан шорт-трек буйынса ярыштарға Семен Елистратов һәм Руслан Захаров бара.

31-се мәктәп янында алты ай эсендә үҫеп сыҡҡан был бинала спорт һәм тренажер залы, ял-һауыҡтырыу һәм тренерҙар бүлмәләре бар. Ул 2006-15 йылдарға ҡабул ителгән физкультура һәм спортты үҫтереү буйынса республика һәм федераль йүнәлешле программалар буйынса төҙөлгән.



## Быуындар араһында ярыш

Мәктәп уҡыусылары араһында үткәрелгән XII Республика спартакиадаһына өлкәндәр ҙә ихлас ҡушылып китте. Журналистар, уҡытыусылар, хөкүмәт вәкилдәре мәктәп командаларына ҡаршы төрлө ярыштарҙа көс һынай. “Аманат” та был саранан ситтә ҡалманы. Ғинуар аҙағында Өфөнөң Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында ”Башҡортостан” дәүләт телерадиокомпанияһы һәм республика гәзит-журналдары хеҙмәткәрҙәре, 20-се һәм Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусылары командалары араһында “Аманат” журналы кубогына волейбол буйынса турнир ойошторолдо.



Беренсе урынды хужалар – 20-се ҡала гимназияһы командаһы яуланы (**һүрәттә**).




## Әсәкәйем

Ер шарында иң матуры
Ул бит минең әсәйем.
Беҙҙең өсөн янып-көйөп
Ғүмер буйы йәшәйһең.

Әсәкәйем, берҙән-берем –
Миңә ғүмер биреүсе.
Ҡайҙа ғына йөрөһә лә
Тура юл күрһәтеүсе.

Әсәкәйем, күҙ нурҡайым
Һин бит минең ҡояшым.
Ҡолағымды наҙлай һәр саҡ
Һинең көмөш тауышың.

Теләйем һиңә әсәйем,
Ҡоростай ныҡлы һаулыҡ.
Теләйем һиңә бәхеттәр,
Теләйем ҙур-ҙур шатлыҡ.

**Регина БИЛАЛОВА.**
**Хәйбулла районының**
**Әбүбәкер мәктәбе.**

## Әсәйем өйрәтә

Әсәйем мине
Эшкә өйрәтә,
Өйрән, тип төрлө
Эштәр эшләтә.
Иҙән һеперәм,
Һауытты йыуам,
Керҙәрҙе йыуып,
Үтекләп ҡуям.
Башҡаға булһа
Эшләгән эшең,
Өйрәнеүең, ти,
Тик үҙең өсөн.

**Ирина ГАРИПОВА.**
**Мәсетле районы,**
**Яңы Мишәр мәктәбе.**

## Ҡыш килде

Бына килде һалҡын ҡыш.
Балаларҙы саҡыра тыш:
Әйҙә, тышта уйнайыҡ,
Сана, саңғы шыуайыҡ!
Бына килде ҡыҙылтүш,
Уға ем — ҡыҙыл миләш.
– Әйҙә, – ти, – сыҡ тиҙерәк,
Тышта рәхәт бигерәк.
Бына мин тышҡа сыҡтым,
Аяҡҡа саңғы таҡтым.
Бик тә рәхәт уйнауы,
Ҡарҙа саңғы шыуыуы!

**Гөлфиә ЗАҺИҘУЛЛИНА.**
**Стәрлебаш районының**
**Иҫке Ҡалҡаш мәктәбе.**

## Ҡыш

Урман, ҡырҙарға
Ябылған юрған.
Ҡош мамығылай
Ап-аҡ ҡар яуған.
Шаулы урмандар
Тып-тыныс ҡалған.

**Сәлимә МУСИНА.**
**Дүртөйлө башҡорт**
**гимназияһы уҡыусыһы.**

## Әсәйемә

Аллы-гөллө сәскәләрҙе йыйып,
Әсәй, яндарыңа ашығам.
Аҙ ғына күрмәй торһам да һине
Йөрәккәйем шундуҡ һағына.

Ҡулдарыңа һалып башҡайымды,
Бер туҡтамай һиңә йырлармын.
Мөмкин булһа, әсәй, һинең менән
Йыһандарҙы гиҙеп, буйлармын.

Һыуыҡ саҡта ҡайнар ҡуйыныңда
Иркәләнеп кенә йылынам.
Күҙҙәреңдән һүнмәҫ осҡон алып,
Яҡты көндәремә ҡыуанам.

Һинең фатихаларың менән
Барған юлдарымда арымам.
Ҡайҙа ғына булһам да, һин барҙа
Тыныс күңелемдән тын алам!

Әсәкәйем, яндарымда булһаң
Ерҙә иң бәхетле мин һымаҡ.
Шул ваҡытта ғына тирә-яғым
Минең өсөн яна нурлыраҡ!

**Айгөл ЮНЫСОВА,**
**“Аманат”тың йәш хәбәрсеһе.**
**Хәйбулла районы,**
**Ғәлиәхмәт мәктәбе.**

## Яҡын дуҫ

Дуҫ - ниндәй таныш һүҙ!
Әсәйҙән һуң иң яҡыны миңә дуҫ.
Ҡыйын саҡта ярҙам итьер,
Кәрәк саҡта һин дә уға ярҙам һуҙ.

Аңлай ул һәр ваҡыт
Уй-кисерештәрең.
Ҡыйын саҡта илап алам,
Йәшермәйем күҙ йәштәрен.

Сөнки беләм: ташлап китмәҫ,
Бик яҡшы кәңәш бирер.
Уның әйткән һүҙҙәренә
Хатта таш йөрәк ирер.

**Линария ҒӘЛИМОВА.**
**Дәүләкән районының**
**Ҡыҙрас мәктәбе.**



# ТӘЛМӘРЙЕН ТАРИХЫ

**Әкиәт**

Һыуҙа тереклек башланғас, уның йәнлектәре баштан уҡ һүҙ беркетеп ҡуйғандар, ти: һөйләшеп түгел, ым-ишара ярҙамында ғына аралашырға. Беҙ күмәк, барыбыҙ ҙа телмәр тота башлаһаҡ, һыу төбө ҡайнап торасаҡ, тигәндәр.

Тик тәлмәрйен һис кенә был ҡанундарға буйһонорға теләмәгән. Ахырҙа балыҡтар, ҡыҫалалар һәм башҡа Һыу иле халҡы туҡтауһыҙ "куа-а, куа-а"нан ялҡып, ләпелдәккә хөкөм сығарырға булғандар, ти. Тәлмәрйен һыуҙаштарының ҡаты тәнҡитен тыңлағас, былай тигән: "Ни эшләйем һуң, һыуһыҙ ҙа, һүҙһеҙ ҙә йәшәй алмайым. Мин шулай итеп йырлайым бит, күңелем тулып киткән саҡта шәп булып ҡала", – тип аҡланып ҡараған. Тик берәү ҙә дөйөм ҡағиҙәне боҙорға тейеш булмаған. "Йә илдән сығып китәһең, йә һөйләнеүеңдән туҡтайһың", – тигән шарт ҡуйыла тел биҫтәһенә. Телмәр йәнле тәлмәрйен уйлаған-уйлаған да, һөйләшкеһе, үҙенсә йырлағыһы килһә, һыу өҫтөнә сығырға хәл иткән. Яр башында күңеле бушанғансы йырлап, кире һыуға һикерер булған.

Шунан алып тәлмәрйендәр ер-һыу йәнлеге булып киткән, ти.

**Әлфинә НӘБИУЛЛИНА.**
**Бөйрән районы,**
**Нәби ауылы.**

# АЛТЫН-КӨМӨШ БАЛЫҠТАР

**Әкиәт**

Бик борон заманда, халыҡ һыуға табынған саҡта, ризалығын алыр өсөн, кешеләр йылға-күлгә алтын-көмөш тәңкәләр ташлар булған. Һыу аҫты донъяһы хужалары – шуҡ йылғыр балыҡтар тәңкәләрҙе тәндәренә йәбештереп, ҡупшыланыр булып, кемуҙарҙан һыуға ялтыр тәңкә төшкәнен көтөп кенә торғандар, ти. Йәйгеһен матур алсаҡ көндәргә ҡыуанып, тәңкә хужалары һыу өҫтөндә ҡарпып шаярғандар, ялт-йолт килеп барыһын да үҙҙәренә ылыҡтырғандар.



Ваҡыт үтә килә кешеләр, тәңкәләрен кире алмаҡсы булып, төрлө юлдар менән балыҡтарҙы тота башлаған. Тик ни ғәжәп, тәңкәләрҙе һыҙырып алыу менән, улар бөтөнләй ябай ҡабыҡҡа әйләнә лә ҡуя икән. Бик оҙаҡ ваҡыт шулай дауам иткән: ялтырға ҡыҙығып, балыҡ аулағандар, ә улары көткәнде аҡламаған, ти. Ахырҙа кеше тотҡан балыҡтары менән туҡланырға өйрәнеп киткән. Шунан алып көмөш тәңкәләрҙе үҙенеке итеү уйынан ваз кискән кеше: ҡасандыр бүләк иткәнде һалдырып алыу мәғәнәһеҙлек тәһә.

Ә балыҡтар һаман шулай барыһының күҙен ҡыҙҙырып уйнаҡлауын дауам иткән, кешеләр улар хаҡында йырҙар, шиғырҙар сығарған.

Әле лә йәш килендәргә һыу юлы күрһәткәндә, шишмәнән һыу эскәндә ялтыр тәңкәләр ташлайҙар.

**Айсар НӘБИУЛЛИН.**
**Бөрйән районы,**
**Нәби ауылы.**





Хат-Хәбәр
АМАНАТ

# Йор һүҙле өләсәйҙәрем

Мин үҙемде бик бәхетле тип иҫәпләйем, сөнки минең әсән әҙәләп торған ике өләсәйем бар. Уларҙың бала сағы бик ауыр һуғыш йылдарына тура килгән. Икеһе лә йәш көйө колхоз эштәрендә ҡатнашҡан, еңеү өсөн бөтә көстәрен һалғандар.

Атайымдың әсәһе Баймөхәмәтова Ғәшүрә Фазлетдин ҡыҙы Баймаҡ районы Икенсе Эткол ауылында йәшәй. Ул йәш сағында фермала һарыҡ та көткән, һыйыр ҙа һауған. Ә аҙаҡ балалар баҡсаһында эшләй.

Әсәйемдең әсәһе Фәйзуллина Нурикамал Сөләймән ҡыҙы Баймаҡ районы Үрге Йәйыҡбай ауылында донъя көтә. Ул алтынсы синыфты тамамлаған та колхозға эшкә төшә. "Йәҙғыһын сәсеүгә йөрөнөк, ат менән ер һөрә торғайныҡ", – тип хәтерләй өләсәйем.

Хәҙерге көндә икеһе лә хаҡлы ялда. Каникул көндәрендә уларға ҡунаҡҡа йөрөйөм. Яҡты йөҙ менән ҡаршы алып, тәмле аштары менән һыйлайҙар, гел яҡшылыҡҡа ғына өйрәтәләр. Кистәрен улар һөйләгән әкиәттәрҙе, лаҡаптарҙы тыңларға яратам.

Шундай изге күңелле, яғымлы, йор һүҙле өләсәйҙәрем менән бик ғорурланам.

**Заһир БАЙМӨХӘМӘТОВ,**
**Сибай ҡалаһының**
**"Ирәндек" лицейы уҡыусыһы.**

# Бил бирмәҫ Фидан



Һеҙ фотоһүрәттә күргән был үсмер – йәш көрәшсе Фидан Көҫәпҡолов. Стәрлебаш районының Түбәнге Аллағыуат ауылында йәшәй. 9-сы синыфта белем ала. Фидан бәләкәйҙән шуҡ, теремек, алсаҡ булып үҫә. Телевизорҙан көрәш буйынса үткән ярыштарҙы ҡарарға ярата. Тиҙҙән кумирҙары ла барлыҡҡа килә. 2008 йылдан үҙе лә көрәш менән шөғөлләнә башлай. Район, төбәк-ара көрәш бәйгеләрендә ҡатнашып, күп тапҡыр призлы урындар яулай, Маҡтау ҡағыҙҙары, миҙал һәм кубоктар менән бүләкләнә. Стәрлетамаҡ ҡалаһында республика уҡыусылары араһында уҙған бәйгелә лә чемпион исеменә лайыҡ була.

Фидан уҡыуҙа ла һынатмай, бөтә фәндәрҙән дә тик яҡшы билдәләргә өлгәшә. Йыр-бейеүгә лә оҫта. Мәктәптәге бер сара ла уның ҡатнашлығынан тыш үтмәй. "Ятып ҡалғансы атып ҡал" тигән мәҡәлде үҙенең йәшәү девизы итеп алған ул. Маҡсатҡа ынтылыусан, тырыш был егеткә уңыштар, яңы еңеүҙәр юлдаш булһын!

**Гөлиә КӨҪӘПҠОЛОВА,**
**БДУ студенты.**

# Афарин!

Беҙҙең ауылда уңған һәм күркәм ғаиләләр бик күп. Шуларҙың береһе – минең менән бер синыфта уҡыусы Настя әхирәтемдең ғаиләһе. Ғаиләлә улар бөтәһе 10 бала тәрбиәләнә. Яңыраҡ улар йәнә бер сабыйҙы тәрбиәгә алдылар. Йорттары ла шундай ҙур, әллә нисә бүлмәһе бар. Уйынсыҡтарҙың да ниндәйе генә юҡ, барып инһәң, үҙеңде әкиәт донъяһында тип хис итәһең. Өйҙәрендә һәр саҡ тәмле аш еҫе танауҙы ҡытыҡлай. Был ғаиләлә тәрбиәләнеүсе балаларҙы бәхетле тип әйтергә тулы нигеҙ бар.

Етем балаларҙы үҙ ҡосағына алыусы ошондай ғаиләләр күберәк булһын ине!

**Нәфисә ТУҒЫҘБАЕВА,**
**Хәйбулла районының**
**Бүребай мәктәбе уҡыусыһы.**

# Әсәйем, кәҙерлем

Әсәйем, Рәхимә Әбдрәхим ҡыҙы Ҡолбирҙина, 1965 йылдың октябрендә тыуған. Ата-әсәһе, ауылдың хөрмәтле кешеләре, ҡыҙҙарын намыҫлы, шәфкәтле итеп тәрбиәләй. Әсәйем, мәктәптән һуң, Сибай педагогия училищеһына уҡырға инә. Уны уңышлы тамамлап, Иҫке Собханғолдағы "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһына эшкә тәғәйенләнә. Әсәйем – балаларҙы, балалар уны бик ярата.

Әсәйем ҡул эшенә лә бик оҫта. Мәктәптә уҡыған сағында уҡ ябай ептән селтәр яғалар, салфеткалар сигергә өйрәнгән, кофта, бейәләй, башлыҡтар бәйләгән. Әле лә ошо шөғөлдәрен ташламай.

Әсәйемдең тағы бер яратҡан шөғөлө – гөл үҫтереү, баҡса ҡарау. Өйөбөҙҙә ҡыш көнө лә гөлдәр шау сәскә атып ултыра.

Ағайым менән беҙ ҙә ғәзиз кешебеҙҙе ҡайғыртмаҫҡа тырышабыҙ, мәктәптә тик яҡшы билдәләргә өлгәшәбеҙ. Ҡулдан килгәнсә ярҙам итәбеҙ, сөнки донъяла әсәйҙән дә кәҙерлерәк бер кем дә юҡ икәнен яҡшы аңлайбыҙ.

**Айзилә ҠОЛБИРҘИНА.**
**Бөрйән районының**
**Иҫке Собханғол ауылы.**

# Ауылым — алтын бишегем

Ауылымдың исеме – Күгиҙел. Мәҙәниәт йорто, магазин, балалар баҡсаһы, ике китапхана, мәктәп бар. Ауылды йыл да төҙөкләндерәләр: өй һалып инәләр, юлдар төҙөйҙәр. Ә тәбиғәтенә ҡараһаң, иҫең китер.

Ауылымды тирә-яғынан бейек ҡая таштар, тауҙар уратып алған. Эргәһендә бик күп шишмә һәм йылғалар бар. Ауылыбыҙҙы икегә бүлеп Суҡҡарағас йылғаһы аға. Элек Суҡҡарағас бәләкәй шишмә булған. Ағып сыҡҡан ерендә ике ҡарағас үҫкән. Исеме лә шунан сыҡҡан. Суҡҡарағас – ҡуш ағас тигәнде аңлата. Урман-тауҙар араһынан Күгиҙел йылғаһы аға. Ауылыбыҙҙың исеме шул йылғанан сыҡҡан.

Ҡыш көнө бигерәк матур. Ҡар юрғандар ябынып ғорур тауҙар тора. Урманға ҡараһаң, ағастарға бәҫ ҡунған, был күренеш бигерәк тә таң атып килгәндә ғәжәп матур. Ҡояш нурында йымылдаған ҡар, әйтерһең дә, мәрйендәр.

Үҙ ауылымды ташлап бер ҡайҙа ла китмәйәсәкмен. Уның тәбиғәтен бер көн күрмәһәм, һыуын эсмәһәм, бигерәк ҡыйын була, һағынып ҡайтам.

**Айгөл СӘЙФУЛЛИНА.**
**Баймаҡ районы,**
**Күгиҙел ауылы.**



# "Аманат" беҙгә ярҙамсы

Мин Өфөләге 111-се гимназияның IX "В" синыфында белем алам. Башҡорт синыфы һаналабыҙ. Беҙҙән башҡа тағы өс башҡорт синыфы бар. Башҡорт телен тәрәнәйтеп өйрәнәбеҙ. Әҙәби кисәләр, түңәрәк өҫтәлдәр үткәрәбеҙ, музей, театрҙарға йөрөйбөҙ. Башҡортса үткәрелгән олимпиада, конкурстарҙа әүҙем ҡатнашабыҙ. Беҙгә был эштәрҙе ойоштороуҙа синыф етәксебеҙ Наилә Яхъя ҡыҙы Насирова ярҙам итә. Ул башҡорт теленән уҡыта.

Дәрестәрҙә "Аманат" журналында сыҡҡан мәҡәләләргә лә байҡау яһайбыҙ. Бигерәк тә "Көләмәстәр", "Хат яҙышайыҡ әле", "Аманат" энциклопедияһы" рубрикалары һәм сканвордтар сисеү оҡшай. Синыфтан тыш уҡыу дәрестәрендә журналда баҫылған повесть, хикәйәләрҙе ҡулланабыҙ.

**Быйыл "Аманат"ка синыфыбыҙ менән яҙылырға булдыҡ. Башҡалар ҙа беҙҙән өлгө алһын!**

**Регина ӘХМӘҘИЙӘРОВА.**
**ҺҮРӘТТӘ: IX "В" синыфы.**

# Бында тыуа



**Мәләүез районының Смаҡ ауылындағы Динис Бүләков исемендәге мәктәп районда алдынғыларҙан һанала. Бының шулай икәнлеген дәлилләр алдынан башта ябай белем усағынан әллә күпме арҙаклы шәхестәр үҫеп сығыуын телгә алып үтеү кәрәктер. Мәҫәлән, журналыбыҙҙың элекке баш мөхәррире, күренекле әҙип, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Динис Бүләков, фән докторҙары, профессорҙар Зиннур Ғизелхаҡ улы Бикбулатов, Йәғәфәр Мөхәррәм улы Әбдрәшитов, Усман Барый улы Ғайсин, Дәүләкән районы хакимиәте башлығы Закир Ғизелхаҡ улы Бикбулатов, Башҡортостан мәғариф министрлығының баш белгесе Фәриҙә Барый ҡыҙы Маннапова, запастағы өлкән мичман, һәүәҫкәр рәссам Фәнил Сафуан улы Яманаев...**

Бөгөн унда 79 уҡыусы белем ала. 19 уҡытыусы уларҙы ғилем серҙәренә төшөндөрә. Тирә-яҡта урынлашҡан Шәрип, Яңауыл, Исламғол, Береговка, Йомаҡ һәм Красногорка ауылдарынан килгән балаларға йәшәү өсөн интернат та бар. Уҡыусылар һаны йылдан-йыл кәмеһә лә, бирешмәйҙәр, ҡала һәм район кимәлендә уҙған төрлө конкурстарҙа һәр саҡ алдынғы урын яулайҙар.

Былтыр декабрь айында “Һәр уҡыусыға – бер республика журналы, бер республика гәзите” исеме аҫтында уҙған акцияны ла дәррәү күтәреп алғандар. Етенселәр синыфтары менән иң беренсе булып “Аманат” журналына яҙылған.



“Һәр эште алдан башлап йөрөйҙәр, мәктәптәге бер саранан да ситтә ҡалмайҙар. “Нөгөш ынйылары” түңәрәгендә лә ихлас шөғөлләнәләр. 11 уҡыусының 6-һы тәүге ярты йыллыкты тик яҡшы билдәләргә генә тамамланы. Андрей Волков исемле бер рус малайыбыҙ ҙа бар, башҡорт телен яратып өйрәнә, хатта фольклор түңәрәгенә лә йөрөй,” – тип һөйләй синыф етәксеһе Гөлсөм Исмәғзәм ҡыҙы.



“Етенселәрҙән бишенселәр ҙә ҡалышырға теләмәне, улар ҙа синыф менән журналға яҙылды. Йылдың-йылы беҙҙең төбәк районда башҡортса сыҡҡан баҫмаларға яҙылыу буйынса беренсе килә. Әйткәндәй, Гөлсөм Исмәғзәм ҡыҙы туған телдәге баҫмаларға яҙылыу буйынса ҡала һәм район конкурсында еңеүсе тип табылды”, – тине китапханасы Кинйәбикә Юлмөхәмәтова.

Афарин, Гөлсөм апай! Һеҙҙең шул тиклем егәрле, башҡорт рухлы булыуығыҙға таң ҡалырлыҡ! БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, мәғариф алдынғыһы тигән мактаулы исемдәргә эйә был уҡытыусы мәктәбенең данын районда ғына түгел, ә тотош республика кимәлендә таныта.

# Һөйөү илгә



Йыл һайын 14 мартта, Динис Бүләковтың хәтер көнө уҙғарылып, майҙа иһә тыуған көнө иҫкә алына. Ошо айҡанлы уҡыусылар араһында иң яҡшы шиғыр, һүрәткә конкурс иғлан ителә. Ауыл мәҙәниәт йортонда урынлашҡан әҙип исемендәге тыуған яҡ музейына ла йыш барып йөрөйҙәр.

– Беҙҙә көрәш буйынса чемпиондар ҙа тәрбиәләнә, ғөмүмән, балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтереүгә генә түгел, ә физик яҡтан һау-сәләмәт булып үҫеүҙәренә лә ҙур иғтибар бирелә. Физкультура уҡытыусыһы Әхтәм Йомагилде улы үҙ эшенә мөкиббән киткән тәжрибәле педагог. Ул – Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, – тигән һүҙҙәрҙе ишеткәс, спорт залына ла һуғылдыҡ. Бәхетиһәң, Әхтәм ағайҙың улы Илмир ҙа атаһы юлынан киткән. Бөгөн икәүләшеп малайҙарҙы көрәш серҙәренә төшөндөрәләр. Тәрбиәләнеүселәре араһында хәҙер республика буйынса ике чемпион һәм дүрт призер бар. Шулай уҡ еңел атлетика, гер күтәреү, баскетбол менән шөғөлләнеүселәр ҙә етерлек. Йәш көрәшселәрҙең береһе Закир Күсәкәев 11-се синыфта уҡый. Былтыр спорттың ошо төрө буйынса республикала үҙ тиҫтерҙәре араһында өсөнсө урын яулаған. “ Көрәш менән өсөнсө йыл шөғөлләнәм. Көрәштән тыш, гер күтәреү ҙә оҡшай. Гер күтәреү буйынса ла район күләмендә призлы урын алғаным булды. Мәктәптән һуң Стәрлетамаҡ физик культура институтына уҡырға инергә йыйынам”, – тине Закир.



Халҡыбыҙ йолаларын, ауыҙ –тел ижадына йәштән ғашиҡ, оҫта бейеғән Гөлсөм апай 1989 йылда фольклор түңәрәге ойоштора. Унда йөрөргә теләүселәр бик күп була. Күп тә үтмәй, түңәрәк “Нөгөш ынйылары” коллективына әүерелә.

– Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеүҙе һәм тергеҙеүҙе маҡсат итеп алғанбыҙ. Ауылдағы инәй-олатайҙарҙан боронғо йолаларҙы, йыр-бейеү өҫтөнлөк иткән күмәк уйын өлгөләрен яҙып алыу, уларҙы сәхнәләштереп халыҡҡа күрһәтеү менән шөғөлләнәбеҙ. “Кейәү йортона килен төшөрөү”, “Йыртыш”, “Һыу юлы”, “ Бәпес тыуыу”, “Аулаҡ”, “Кәкүк сәйе”, “Ҡышҡы нардуған”, “Ямғыр теләү”, “Бәпес ҡоймағы” һәм башҡа күп йолалар, халыҡ байрамдарын әҙерләп күрһәттек, халыҡ ижады, фольклор буйынса үткән республика конкурс, фестивалдәрендә ҡатнашып, бихисап диплом, Маҡтау грамоталарына лайыҡ булдыҡ. Былтыр “Башҡортостан ынйылары” тигән республика конкурсында 18 коллектив араһында өсөнсө урын яуланыҡ, төрлө номинацияларҙа ете Маҡтау грамотаһы алып ҡайттыҡ, – тип һөйләй Гөлсөм Хисаметдинова.

Ысынлап та, дәрестән һуң балаларҙың төрлө түңәрәктәргә, секцияларға ашығыуы һөйөнөслө күренеш. “Нөгөш ынйылары”нан һуң “Оҫта ҡулдар” түңәрәгенә йөрөүсе балалар менән таныштыҡ. Ҡамырҙы, ҡорамаларҙы, кипкән сәскәләрҙе ҡулланып, ниҙәр генә эшләмәгән улар. Папье-машенан эшләнгән милли кейемдәге ҡурсаҡтар үҙҙәре ни тора!

– Түңәрәктә 17 бала шөғөлләнә, уларҙың алтыһы – малай. Биҙәү-ҡулланма сәнғәте буйынса районда һәр саҡ призлы урын яулайбыҙ, – ти Кинйәбикә Сәғит ҡыҙы.

Бына шулай был мәктәптә аҙ ғына булһаҡ та, күпме һәләтле уҡыусылар, үҙ эшен яратып башҡарған уҡытыусылар менән таныштыҡ, уңыштарын барланыҡ, иң мөһиме, тыуған илгә, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады, йолаларына һөйөү тәрбиәләнеүенә ихлас һөйөндөк.

**Нурия ФАЗЛЫЕВА.**

**ҺҮРӘТТӘРҘӘ:**
**“Оҫта ҡулдар” түңәрәгендә; үҙ ҡулдарыбыҙ менән яһаған ҡурсаҡтар; Динис Бүләков исемендәге тыуған яҡ музейында; йәш көрәшсе Закир Күсәкәев.**
**Илһам ӘХМӘҘУЛЛИН фотолары.**

# БАШҠОРТОСТАН ПРЕЗИДЕНТЫ МОРТАЗА ҒӨБӘЙҘУЛЛА УЛЫ РӘХИМОВТЫҢ НӘҪЕЛ ШӘЖӘРӘҺЕ



**Ырыуы – сәнкем-ҡыпсаҡ**

**Ағасы – ҡарама**

**Ҡошо – бөркөт**

**Ораны – туҡһаба**

**Тамғаһы – ⋎ (ҡойошҡан)**




**“Башҡорт шәжәрәләре” (Анкара, 2009) китабынан алынды.**




# ТОРНАЛАР ТУҒАЙЫ

Беҙҙең Хәйбулла районының Әбүбәкер ауылы һыулаған Ташлы йылғаһы буйындағы Ҡоланбай ташы ҡаршыһында халыҡ кинәнеп ял итә торған йәмле туғай бар. Уның тирә-яғындағы тау битләүҙәрендә төрлө ағастар үҫә, хатта сейә, ҡарағат та бар. Яҡында ғына Бөркөт тауы башында Көтөр батыр мәмерйәһе урынлашҡан.

Был матур төбәкте – Торналар туғайы, торналар йөрөгән тау битләүен Торналар һырты тип атап йөрөтәләр. Матур туғайҙың урта өлөшөндә түңәрәк рәүешендә таллыҡ бар, уның эсендәге күл ҡороп бөтөп бара инде. Элек ошо урында ҙур ғына күл булған, тип һөйләй ауыл ҡарттары. Йылы яҡтан ҡайтҡан торналар ошонда оя ҡорған, бала сығарған. Ауыл халҡы уларға һаҡсыл мөнәсәбәттә булған. Йылдар үтеү менән күл ҡороп юҡҡа сыҡҡан, шуға ла торналар был яҡҡа ҡабат әйләнеп килмәгән. Әммә был урын һаман хозурлығын юғалтмаған әле, ауыл халҡының бесәнлектәре шунда, ял итергә лә шунда сығалар.

# КӨТӨР БАТЫР МӘМЕРЙӘҺЕ

Борон заманда башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында татыулыҡ булмаған, бер-береһе менән яулашып йәшәгәндәр. Йыш-йыш ҡына һөжүмдәр яһап, бер-береһенең малын ҡыуып алып китер булғандар.

Башҡорттарҙың Көтөр исемле батыры була. Атта оҫта йөрөүе, мәргәнлеге менән ул Үҫәргән ырыуы араһында дан тотҡан. Бер бәрелештә башҡорттар ҡаҙаҡтарҙың һөжүменә ҡаршы тора алмаған һәм Көтөр батыр дошман ҡулына эләккән. Ләкин тотҡонда ул оҙаҡ булмай, уңайлы мәлен табып, ҡасып китә. Эҙәрләүҙәрҙән ҡасып, күп ерҙәрҙе гиҙгәс, ул Ташлы йылғаһы буйында бик уңайлы тау ҡыуышына осрай һәм ошонда йәшәй башлай. Һуңынан был тау ҡыуышы Көтөр батыр исеме менән аталып киткән. Ул Әбүбәкер ауылынан 3-4 саҡырым алыҫлыҡтағы Бөркөт тауы итәгенең көньяғында, йылғанан 500 метрлап бейеклектә урынлашҡан.

Бынан күп йылдар элек мәмерйә ауыҙы атлап инерлек булған. Эсе иркен генә булған, төптә аҫҡа төшөр өсөн ҙур тишек булған, ә өҫтәге бәләкәй тишектән яҡтылыҡ инеп торған. Стеналарҙа ташҡа соҡоп бороноғо яҙмалар яҙылған, бүре һүрәттәре төшөрөлгән, һауыт-һаба ла осрай.

Мәмерйәнең өҫтөндә таш араһында йөҙйәшәр ҡайын үҫеп ултырҙы, 2004 йылда ул ҡартайып, сереп йығылды. Ағасҡа иҫтәлек һәм ырым өсөн төрлө таңҡәләр, балдаҡтар, муйынсаҡтар ҙа таҡҡандар.

Элек ауыл халҡы бында килеп ял итергә, күңел асырға яратҡан. Һуңғы йылдарҙа мал күпләп йөрөү, игенде химикаттар менән эшкәртеү сәбәпле ағас-ҡыуаҡтар юҡҡа сығып бара. Көтөр батыр мәмерйәһенә хәҙер бөтөнләй инерлек түгел, сөнки ғәмһеҙҙәр ауыҙын емертеп төшөргән. Әгәр ҡыҙыҡһыныусылар булһа, уны яңынан асып, серҙәрен тикшерергә мөмкин булыр ине. Хәҙергә унда мәктәп уҡыусылары экскурсияға килеп, легендаһын тыңлап ҡына ҡайта.

**Мораҙым МӘМБӘТОВ.**
**Хәйбулла районы, Әбүбәкер ауылы.**

**Гөлнара Мостафина**




Урам буйлап һул аяғына аҡһай-аҡһай бер ҡарт атлай. Аҡһаҡмын тимәй үҙе, ҡайҙалыр тиҙерәк барып етергә теләгәндәй, аҙымдарын шәп-шәп баҫа. Сибек кәүҙәһен тота алмайынса ана-бына абынып йығылыр төҫлө тойолһа ла, таяҡҡа таянмаған. Өҫтөндәге муйынлы свитеры тубығына тик-лем һуҙылған. Салбарының ба-лаҡтарын ойоғона бөрөштөрөп ты-ғып ҡуйған, аяғында иҫке генә галуштар, башында ҡояшҡа уңып һарғайған йоҡа фуражка. Битен-дәге һырҙары, ҡулдарындағы ҡатлы-ҡатлы сырыштары, төпкә батҡан күҙҙәре, йыйырылған ҡаш-тары уның тормош юлының еңел генә булмауы тураһында һөйләй. Үҙ ғүмерендә күпте күргән, күпте кисергәндер ул. Был урамдан ҡарттың беренсегә үтеүе түгел. Бында уның ҡыҙы, ейән-ейәнсәрҙәре йәшәй. Һағынып китһә, килгән-дәрен көтөп ятмай, бына шулай хәлдәрен үҙе килеп белә.

Уны көтөп кенә торған кеүек, тыҡрыҡтан саң туҙҙырып 9-10 йәштәр самаһындағы бер өйөр малайҙар килеп сыҡты. Унан: “Сатан тауыҡ, Сатан тауыҡ!...” – тип һамаҡлай-һамаҡлай кемуҙарҙан әлеге ҡарт артынан йүгерҙеләр. Ә ҡарт, әйтерһең, һаңғырау, һәм уларҙың һамаҡлауҙарын бөтөнләй ишетмәй, нисек барған, шулай бара бирә. Малай-ҙарға ҡыҙыҡ, уның һайын нығыраҡ ҡысҡыралар, шарҡылдап көләләр. Кемеһелер, юл ситенән таш алып, аҡһаҡ ҡарт артынан бәрергә лә йыбанманы. Ярай әле уныһы барып етмәне.

Баҡсаһы эсендә соҡор ҡаҙып йөрөгән Йәнғәле бабайҙы эшенән малайҙарҙың тауышы айырҙы. Йөрәге әрнеп уларҙың йәмһеҙ ҡыланышын күҙәтеп тора башланы. Аҡһай-туҡһай атлаған ҡорҙашы тағы ла бәләкәсәйеп ҡалғандай булып, йәлләү тойғоһо уятты, күҙҙәре йәшләнде. Түҙмәне, малайҙар баҡса тәңгәленә еткәс, уларҙы ҡысҡырып туҡтатты, үҙенең янына саҡырҙы. Оло кеше өндәшкәс, үтеп китергә ҡыйманылар, туҡтанылар, ярһыуҙарын саҡ тыйып, уның янына килеп баҫтылар. Тапҡан “ҡы-ҙыҡ”тарынан күҙҙәре баҙлап янған үсмерҙәрҙең бөтә ҡиәфәте: йә инде, тиҙерәк һөйлә лә, ваҡыты-быҙ юҡ, тигәндә белдерә ине.

– Мин ул ҡарттың ниңә сатанлағанын беләм, – тип ул әлеге ҡартҡа ымланы, унан һынсыл ҡара-шын, мыш-мыш танауын тартып, тиҫтерҙәре араһында торған Айҙар ейәненә күсерҙе. – Һеҙҙең дә белгегеҙ киләме?

Малайҙарҙың ҡарттан да ҡалғылары килмәй, Йәнғәле бабайҙың хәбәре лә ылыҡтырғыс. Бер аҡ-һай-аҡһай алыҫая барған ҡартҡа, бер Айҙардың олатаһына күҙ һалғас, алмаш-тилмәш бер-бере-һенә ҡараштылар.

– Һарай башында һеҙҙең кеүек ике шуҡ малай шырпы менән уйнаған һәм янғын сығарған. – Йәнғәле бабай һөйләй ҙә башланы. – Ҡоро бесән һә тигәнсе янып киткән. Малайҙар, төшөргә өлгөрә алмайынса, ҡыйыҡ эсендә ҡалған. Иң тәүҙә янғын-ды әлеге һеҙ артынан үсекләп йүгергән ҡарт күреп ҡала һәм ярҙамға ашыға. Икеһен ике яҡ ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып һарай башынан һикергәндә, ҡолап аяғын һындырып аҡһаҡ булып ҡала. Әле ҡарт булһа ла, ул ваҡытта йәш кенә егет ине әле ул. Теге ике малай ҙа үҫте инде. Арағыҙҙа, бәлки, уның улы ла барҙыр... Йә, ярай, барығыҙ инде, йүгерегеҙ аҡһаҡтың артынан, ҡыуып етегеҙ, үсекләүегеҙҙе дауам итегеҙ!

Әле генә береһен-береһе уҙҙырып тамаҡ ярып ҡысҡырған, барыһынан да шәберәк йүгерергә тырышҡан малайҙар ҡаҙаҡланғандай ҡатып ҡалды. Атлар аяҡтары ишелде, ниҙер әйтер телдәре бәй-ләнде. Бигерәк тә Айҙар ни эшләргә лә белмәне. Олатаһы алдында ғына түгел, хатта үҙенең алдында оят ине уға. Иптәштәре таралышып бөткәс тә, ҡарт күҙҙән юғалғансы ҡарап торҙо ул. Эстән генә: “Ғәфү ит. Зинһар, ғәфү итә күр”, – тип бышылда-ны...

***

Айҙарҙың бүтәнсә уйнағыһы килмәне. Башын аҫҡа эйгән килеш олатаһы янына баҡсаға инде. Олатаһының күҙҙәре уйсан, хәрәкәттәре талғын. Хәҙер баяғы аҡһаҡ ҡарт өсөн орошор инде, тип көттө малай. Әммә Йәнғәле бабай бер ни бул-мағандай уға ҡарап йылмайҙы:

– Әйҙә, миңә ярҙам итерһең. Бынау ағасты тото-шоп торорһоң. – Малай һә тигәнсе уның янына

**Гүзәл НОҒМАНОВА һүрәттәре.**

килеп тә баҫты.

Олатаһының буш торғанын күргәне юҡ малайҙың. Һәр ваҡыт нимә менән дә булһа мәшғүл. Әле лә, ана, урманға барғанында ниндәйҙер ағастар алып ҡайтҡан да, хәҙер шуларҙы ултыртырға тип соҡор ҡаҙый башлаған. Айҙар йәтеш кенә бер ағасты һайлап алды ла, соҡорҙоң әҙер булыуын көтә башланы.

Шул мәл улар янына үрге оста йәшәгән Вафа бабай килде.

– Әссәләмәғәләйкүм! – тип күреште ул олатаһы менән. Айҙар уны өләсәһе һүҙҙәренән төртмә телле, бер нәмәнән дә риза була белмәгән мыжыҡ кеше тип белә.

– Вәғәләйкүмәссәләм!

– Бошмаҫ бер нәмә булдың әйтәгүр! Йәшәлгәнең йәшәлгән, көндәрең дә һанаулы ғына ҡалғандыр, ҡайғың шул ағас ултыртыу ғына инеме ни? Емештәрен әллә ашайһы эшең бар, әллә юҡ…

– Мин бит үҙем өсөн тырышмайым…

– Киләһе быуын өсөн, бынау торған еүеш танауҙар өсөн, тигән булаһың инде, ә?

– Әтеү һуң. Унан, тормош бит, хаталанып киткән саҡтар ҙа булды, кемделер рәнйеткән-үпкәләткәнмендер ҙә… Бына ошоларҙың һәр берәһен иҫләп, һәр берәһенән ғәфү үтенеп, һәр берәһе өсөн берәр төп ағас ултыртып, шуның менән күңел тыныслығы алырға ла иҫәп тотоп торам әле…

– Улай бик аҡыллы булғас, әйт әле: бына беҙ йәшәребеҙҙе йәшәнек, ул мәлдәр кире ҡайтмаҫҡа мәңгелеккә алыҫта-алыҫта тороп ҡалды. Шулай булғас, үткән ғүмерең тураһында уйлауҙың мәғәнәһе бармы? Йәки әлегә тыумаған иртәгәһе көнөң тураһында уйлауҙан ни фәтүә? Беҙгә бит бөгөнгө көн ҡиммәт. Бөгөнгөнөң ҡәҙерен белеп, рәхәтләнеп, кинәнеп йәшәп ҡалырға кәрәк!

Йәнғәле бабай уның был һүҙҙәренә көлөп кенә ҡуйҙы. Фуражкаһын маңлай түбәһенәсә этеп, көрәгенә таянған килеш, тирә-яғына ялт-йолт ҡаранған Вафа бабайға текләп торҙо.



– Әгәр үткәндәреңдә хәтереңдән юйғың килә икән, тимәк, ул көндәрҙе хәтерләүеңдән хәтерләмәүең мең артыҡ. Тимәк, мәғәнәле, матур мәлдәре бик әҙ тормошоңдоң, ғүмерең гонаһҡа батҡан. Иртәгәһе көн тураһында уйламайһың, уның етеүен теләмәйһең икән, тимәк, һин унан ҡурҡаһың. Элекке этлектәрең тынғы бирмәй. Шуға күрә, ҡорҙаш, ундай бөгөнгөгә минең һис кенә лә күҙем ҡыҙмай!



Вафа бабай асыуынан ҡыҙарынды-бүртенде лә:

– Әй! Һиңә хәбәр һөйләгән мин алйот! – тип шәпшәп атлап китеп барҙы.

Йәнғәле уның артынан бер аҙ ҡарап торғандан һуң, үҙ алдына һөйләнгәндәй, әйтеп ҡуйҙы:

– Йәлләйем мин уны. Үткәне һәм киләсәге булмаған кешенең бөгөнгөһө бармы икән ни?

– Ә уның үткәне булмағанмы ни?

– Үткәндәр киләсәккә юл һала, улым. Эшләгән эштәрең, ҡылған изгелектәрең ни тиклем күберәк, кешеләргә шул тиклем шатлыҡ, бәхет килтерәһең. Бүтәндәрҙе бәхетле иткән һайын һинең үҙеңдеке лә арта. Бына әле минең ағас ултыртып йөрөүем ябай ғына бер эш кеүек. Ә уйлап ҡараһаң, баҡсамдағы ағастарҙың һаны юҡ. Күпме кеше уның емешен ашап һөйөнәсәк. Ҡышын турғайҙар кинәнер. Дарыу урынына ҡулланғанда ла файҙаһы иҫ киткес ҙур! Юҡ, Вафа бабайың әйтмешләй, һис кенә лә бөгөнгө көн менән генә йәшәргә ярамай.

Һөйләшә-һөйләшә олатай менән ейән эшен тамамланы. Һоҡланып бер аҙ ҡарап торғандан һуң, көрәк, күнәктәрен алып, сығыу яғына ыңғайланылар.

***

Айҙар тупһаға барып ултырҙы. Әле көҙҙөң һуңғы йылы көндәре. Иртән һалҡынса, төшкә ҡарай ҡояш үҙенсә ҡыҙҙырып ебәргән була. Хәҙер нурҙары менән нәҡ иркәләй башлаған сағы. Рәхәт, хатта бер аҙ ойотоп та ебәрә.

Ҡойроғон болғай-болғай тупһа аҫтынан көсөк килеп сыҡты. Айҙарҙы күреүгә ҡыуанысын белдереп, өрә-өрә тарбанлап тупһаға килеп менде, малайҙың битенән ялап алды. Табылдыҡ ул. Мырылдаҡ исемле бесәйҙәре табып алып ҡайтты уны. Муйынынан тешләп, саҡ көсө етеп күтәреп килгән бесәйен мәҙәк итеп тә, ғәжәп итеп тә күҙәткәйне Айҙар. Бахыр көсөктө үҙенең балалары янына индереп һалды ла, үҙенекеләй күрҙе лә ҡуйҙы. Айҙар, әсәһенән айырылған көсөктө йәлләп, ара-тирә эҙләштереп йөрөп тә ҡайтҡайны, тапманы. Көсөк бирешмәй бер ҙә, ана, бесәй балалары менән ярыша-ярыша үҫә. Мырылдаҡ та, күҙ уңынан



тештәрен ыржайтып, күҙҙәрен уҫал йылтыратып, туп-тура әлеге этккә табан атлай ине. Ә көсөк, өлкән эттең ҡурҡыныс түгел икәнен белгәс, дуҫлашырға ла өлгөргәйне, ҡойроғон болғап, эргәһендә уралана. Был Мырылдаҡтың йәнен тағы ла нығыраҡ көйҙөрҙө булһа кәрәк. Ахыр сиктә асыуына түҙеп тора алманы, тотто ла көсөк менән уйнап маташҡан эттең муйынына һикерҙе. Тегеһе сай-сой итеп ҡалды ла, дошманынан ҡотолоу йүнен хәстәрләп, сәбәләнергә тотондо. Әммә Мырылдаҡ та бирешмәй, еңел генә ҡотолормон тип уйлама ла! Айҙар артынан килеп еткән олатаһы саҡ айырып алды Мырылдаҡты эттең елкәһенән. Ҡурҡышынан күҙе аларған "саҡырылмаған ҡунаҡ" нисек сығып һыпыртҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Килеп тыуған хәлгә ни тиергә лә белмәй аптыранған Айҙар йүгереп барып бесәйен күтәреп алды.

– Маладис, Мырылдаҡ! Яҡшы булды! Шулай кәрәк уға! – тип ҡосаҡлап яратты. – Мырылдаҡты шулай батырҙыр тип һис уйламағайным, олатай! Ана ҡайһылай ҡурҡып тормайынса сат йәбеште эттең этенә. Табылдыҡ үҙенең балаһы ла түгел бит әле...

– Бына шулай ул, улым, – тип ейәненә мәғәнәле ҡараш ташланы Йәнғәле ҡарт. – Тапҡан әсәй түгел, баҡҡан әсәй була ул...

***

Өләсәһе Айҙарҙарҙы төшкө ашҡа саҡырҙы. Малай шунда ғына ныҡ итеп асыҡҡанын тойҙо. Мырылдыҡҡа әүрәп, ишек алдына таралған тәмле еҫте лә һиҙмәгән икән дә баһа! Өләсәһе һәм олатаһы менән сәй эсергә ярата ул. Әсәһе, берҙән, газда сәйнүк кенә ҡайната, икенсенән, гел ашыға, үҙе менән бергә башҡаларҙы ла ҡабаландыра. Ә өләсәһенең өҫтәлендә һәр ваҡыт самауыр боҫрап ултыра. Аш бүлмәһе лә яҡтыраҡ, йылыраҡ тойола Айҙарға.

Соландағы йыуынғыста яҙа-йоҙа йыуынды ла, шып итеп өҫтәл артына килеп тә ҡунаҡланы. Ҡулы шунда уҡ өҫтәл уртаһында күҙҙе ҡыҙҙырып ултырған һап-һары ғына ҡоймаҡтарға үрелде. Әммә өлгөрмәне, өләсәһе етеҙерәк булып сыҡты, "брес!" тип ейәненең ҡулына һуғып алды.

ысҡынған "балаһын" эҙләптер инде, тупһа аҫтынан килеп сыҡты. Үҙ баһаһын белеп кенә, ваҡ-ваҡ аҙымдар менән тупһаның иң аҫҡы баҫҡысына килеп ултырҙы. Табылдыҡтың һөйөнөсө сикһеҙ: туп шикелле һикерәңләй-һикерәңләй төшөп китә, аҫта, "әсәһенең" янында ураланғандан һуң, яңынан Айҙар янына юрғалай.

Шул мәл ҡапҡанан ниндәйҙер эт күренде. Әкрен аҙымдар менән ихата уртаһына тиклем килде лә, ултырып, көсөктө күҙәтә башланы. Көсөк, донъяһын онотоп уйнап йөрөһә лә, сит этте шунда уҡ күреп тә ҡалған икән, сағыу тауыш менән өрә-өрә "ҡунаҡҡа" ҡаршы ташланды. Бәләкәй булһа ла үҙенең хужа икәнен, йортто һаҡларға бурыслы икәнен белә бит әле! Теге "ҡунаҡ", ҡурҡҡандай, артҡараҡ сигеп ултырҙы, әммә сығып та китмәне. Ике тамсы һыу кеүек оҡшағайны улар. Бәй, Табылдыҡтың әсәһе лә баһа! Балаһын эҙләп йөрөүе микән әллә?

– Олатай! – тип ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды Айҙар. – Табылдыҡтың әсәһе бит был!.. – Әммә шунда уҡ кикереге шиңде малайҙың: булһа ни, Табылдыҡты барыбер бирмәйәсәк ул. Уның әсәһе бар инде...

– Ысынлапмы, улым? – олатаһына ла ҡыҙыҡ булып китте ахырыһы, һарай яғында йөрөгән еренән килеп сыҡты. Айҙарҙың шул мәл ғәжәп хәлдә күреп иҫе китте. Мырылдаҡ, йөндәрен тырпайтып,



– Олатайың ултырмаған бит әле, ҡайҙа ашығаһың?

Өйҙәге был йола менән яҡшы таныш Айҙар. Ысынлап та, олатаһы өҫтәл артындағы яҫтыҡ һалынған үҙенең урындығына ултырып, икмәк алып, ҡулына ҡалаҡ тотҡас ҡына бүтәндәргә ашай башларға рөхсәт. Өләсәһе был ҡағиҙәгә ҡасандыр балаларын өйрәткән, хәҙер ейәндәренең башына һеңдерә. Олатаһы, үс иткәндәй, һаман соланда мыштырлай.

– Олатай, ашарға ин! – тип ҡысҡырҙы ахырҙа түҙемлегенең сигенә етә барған Айҙар.

– Инеп килә бит һуң, ниңә улай ҡолаҡ төбөндә тамаҡ ярып ҡысҡыраһың? – тип орошоп алды ейәнен өләсәһе.

– Һаман инмәй бит, белмәй йөрөйҙөр тим, – тип аҡланды Айҙар.

Ниһайәт, Йәнғәле бабай һалмаҡ аҙымдар менән өҫтәл артына килеп ултырҙы. Әммә икмәккә үрелергә ашыҡманы, өҫтәл ситендә ятҡан гәзитте ҡулына алды.

– Был донъяла ниҙәр бар икән?..

Ә Айҙарҙың тиҙерәк ашағыһы һәм урамға сығып сапҡыһы килә. Өләсәһе ҙур тәрилкә менән аш ултыртҡас та ҡабаланманы Йәнғәле бабай, әйтерһең, ейәненең түҙемлеген самалай. Өләсәһе Айҙар менән үҙенә лә аш һалды ла, сәй бешерергә була сәйнүкте ҡулына алды.

– Өләсәй, ә мин нисек сәй бешерергә беләм! – Айҙар ашау тураһында уйлауҙан туҡтап, һөйөнсөләп ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

– Бик һәйбәт, – тип йылмайып ҡына ҡуйҙы ла өләсәһе, бүтәнсә бер нәмә лә өндәшмәне.

– Сәй бешерергә генә түгел, башҡа бик күп, бик күп нәмәләрҙе лә эшләй беләм! Барыһын да телевизорҙан ҡарап өйрәндем! – тип ҡыуанысы менән уртаҡлашырға ашыҡты Айҙар. Олатаһы менән өләсәһе хәҙер үлтереп маҡтай башлар тип көттө.

Ниһайәт, олатаһы гәзитенән күҙен айырҙы.

– Телевизорҙан, тиһең инде?.. Унда өйрәнгәндәреңде берәй тапҡыр булһа ла эшләп ҡараныңмы һуң?

– Уны ни... тотаһың да эшләйһең инде... – олатаһының етди өндәшеүенән Айҙар ыҡ-мыҡ килде.

– Һин хәс тә бер хикәйәттәге кеүек булаһың. – Хикәйәт тигәс, малайҙың ҡолаҡтары ҡарп итеп ҡалды. – Унда ла һинең кеүек малайҙар китаптан уҡып ҡына “Мин барыһын да беләм!” тип кәпәренеп маташа.

– Һөйлә әле, олатай?

– Бер остаз дәрес башында уҡыусыларына эш ҡуша:

– Бына һеҙгә боронғо китап. Унда дөрөҫ итеп сәй бешереү тәртибе бирелгән. Дәрес аҙағына һеҙ ошо йоланың серенә төшөнөргә тейешһегеҙ. – Шулай ти ҙә остаз, баҡсалағы эскәмйәгә сығып ултырып, үҙ уйҙарына сума. Уҡыусыларына китапта яҙылғандарҙы уҡып, кәрәк ерҙәрен ятлап, иҫтәрендә ҡалдырырға ваҡыт бирә шулай.

– Йә, нимәләр уҡып белдегеҙ? – тип дәрес аҙағында һөҙөмтәләр менән ҡыҙыҡһына остаз. Уҡыусылар бер-береһен бүлдерә-бүлдерә белемдәре менән маһайырға тотона:

– “Аҡ торна башын йыуа”. Тимәк, сәйнүкте ҡайнар һыу менән сайҡатырға кәрәк.

– Ярай... – тип ризалашып баш һелкә остаз. Уҡыусылар быны күреп тағы ла дәртлерәк аңлата башлайҙар. Берәүһе генә уларҙың һүҙенә ҡыҫылмай, башын эйгән килеш тыңлап ултырыуын белә. Тиңдәштәре кемуҙарҙан шулай сәй бешереү серҙәрен һөйләп бөткәс, ул урынынан тора, барып сәйнүкте ала һәм, бөтә ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәп, тауыш-тынһыҙ сәй бешерә башлай. Әҙер булғас, остазы алдына боҫрап торған хуш еҫле сәй килтереп ултырта.

Уның һәр хәрәкәтен күҙ яҙлыҡтырмай ҡарап ултырған уҡытыусыһы:

– Һинең һөйләгәнең иң яҡшыһы булды, афарин! – тип маҡтай. – Һин мине ҡайнар сәй менән, һәм, иң мөһиме, төп ҡағиҙәне төшөнөүең менән ҡыуандырҙың.

– Ул бер нәмә лә һөйләмәне бит!.. – тип ризаһыҙлыҡ белдереп шаулаша уҡыусылар.

– Эшләнгән эш үҙе тураһында әллә ҡайҙан ҡысҡырып һөйләй ул, – була остаздың яуабы.

Китаптан уҡып йә телевизорҙан ҡарап ҡына “Мин беләм!” тип мөйөш һайын маҡтанып йөрөү әҙәмде биҙәмәй ул, бигерәк тә һинең кеүек егет кешене. Кешенең нимәнелер эшләп ҡуйыуын берәү ҙә һиҙмәй ҙә ҡалһын. Һәм тағы: үҙеңде үҙең маҡтама, хеҙмәтеңде бүтәндәр баһалаһын...

Айҙарға ҡапыл оят булып китте. Бит остарының ҡыҙарыуын тойҙо. Ысынлап та, беләм тип ауыҙ тултырып һөйләгән була ла ул... дөрөҫөндә үҙ ғүмерендә бер генә тапҡыр ҙа сәй бешереп ҡарағаны юҡ бит әле үҙенең. Балта һаплағаны ла, күбә һалғаны ла юҡ. Бәлки, бөтөнләй белмәйҙер? Әҙерәк уйлап ултырғандан һуң: “Өйрәнергә, эшләп ҡарарға кәрәк булыр...” – тип ҡуйҙы.

**(Дауамы бар).**

БАШКОРТОСТАН БАЛАЛАР ҺӘМ ҮСМЕРҘӘР ГӘЗИТЕ

# Йәншишмә



**“Йәншишмә” редакцияһы коллективы. Һулдан уңға ултыралар: Хәлиҙә Чембарисова, Зөһрә Ҡотлогилдина, Мирсәйет Юнысов, Рисәлә Йомағолова, Игорь Киняпин, Хаят Йәрмөхәмәтова; баҫып торалар: Эльвира Әсәҙуллина, Гөлназ Икбаева, Зөбәржәт Миңлебаева, Зөһрә Хәкимова, Азат Вәлиев, Марс Фәткуллин, Регина Зарипова, Юлдаш Әхтәмов, Гөлдәр Бүләкбаева, Рәзилә Ғилметдинова.**

## Тарих биттәренән

1925 – 26 йылдарҙа республикабыҙ ауыл-ҡалаларындағы мәктәптәрҙә тәүге пионер отрядтары менән эшләүгә иғтибар көсәйә төшә. Ошо маҡсатта “Йәш юксыл” (хәҙерге “Йәшлек”) гәзитендә “Ҡыҙыл галстук” тигән ҡушымта сығарыла башлай.

1929 йылдың 12 декабрендә партияның Башҡортостан Өлкә комитеты балалар өсөн туған телдә гәзит сығарыу тураһында ҡарар ҡабул итә.

1930 йылдың 12 февралендә “Йәш төҙөүсе” тип аталған гәзиттең тәүге һаны сыға. Уның мөхәррире шағир Мөхәмәтйәров Хәй була. Гәзит эргәһендә оло һәм кесе йәштәге ижади көстәр туплана. Ғариф Ғүмәр, Мәлих Харис, Ғайнан Әмири, Рәшит Ниғмәти, Мәҡсүт Сөндөклө, Ҡадир Даян, Мостай Кәрим, Гилемдар Рамазанов, Хәким Ғиләжев, Батыр Вәлид, Мөхөтдин Тажи, Сәғит Агиш, Әкрәм Вәли һәм башҡалар уның әүҙем авторҙары була. Шулай уҡ Муса Ғәли, Рәис Ғабдрахманов, Зәйнәб Биишева, Фәрит Иҫәнғолов, Шәриф Биҡкол, Әнүәр Бикчәнтәев, Файыҡ Мөхәмәтйәнов, Фәүзиә Рәхимғолова, Кәтибә Кинйәбулатова һәм тағы бик күптәр — “Йәш төҙөүсе”лә сынығыу алған әҙиптәр.




1931 йылда “Йәш төҙөүсе”нең тиражы 10 меңдән артып китә. Гәзит күп файҙалы эштәр башҡара. Уҡыусыларҙың белем кимәлен күтәреүҙә, хеҙмәт күнекмәләрен үҙләштереүҙә мәғариф органдарына ҙур ярҙам күрһәтә. Идея-сәйәси, әхлаҡ, хеҙмәт тәрбиәһе бергә, эстетик тәрбиә сараларына ла ҙур иғтибар бүлә. Башҡортостандың күп мәктәптәрендә йәш әҙәбиәтселәр түңәрәктәре ойоштора. Күренекле яҙыусылар уларҙы шефлыҡҡа ала. Уҡыусыларҙы халыҡтар дуҫлығы рухында тәрбиәләү буйынса ла күп эштәр эшләнә. Даими рәүештә патриотик темаға арналған, сит илдәрҙәге тиҫтерҙәренең тормошон, көрәшен яктыртҡан хәбәрҙәр баҫылып сыға. “Йәш төҙөүсе” йәш ижади көстәргә киң юл асып, башҡорт балалар әҙәбиәтенә нигеҙ һалыуға булыша.

1941 йыл. “Йәш төҙөүсе”нең тиражы 20 меңгә етә. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, гәзит ҙур

мәҡәлә менән сығыш яһай. Унда республика уҡыусыларын дошманды ҡыйратыуға үҙ өлөшөн индерергә саҡыра. Танк һәм самолет төҙөү өсөн тимер-томор йыйыуға Башҡортостан уҡыусылары әүҙем ҡушыла. 28 июндә “Йәш төҙөүсе”лә тимер-томор йыйыу барышы хаҡында отчет баҫыла. Был гәзиттең һуғышҡа ҡәҙәре сыҡҡан һуңғы һаны була.

1959 йыл. 1 ғинуарҙан гәзит “Башҡортостан пионеры” исеме менән яңынан сыға башлай. Уның мөхәррире итеп яугир шағир Шәриф Биҡкол билдәләнә. Гәзиттең Мәргән, Ишғәле менән Ҡушғәле кеүек геройҙары барлыҡҡа килә. Ошо йылдың 31 майында гәзит “Башҡортостан пионеры” исемендәге поезд буласағын хәбәр итә, уның өсөн 600 тонна металл һынығы йыйырға саҡыра. Һөҙөмтәлә, уҡыусылар йыйған металл һыныҡтары иҫәбенә “Башҡортостан пионеры” исемендәге поезд төҙәлә.

Гәзит йәш быуында хеҙмәткә һөйөү ҙә тәрбиәләй. Уҡыусылар уның йорт ҡуяндары, ҡош-ҡорт үҫтереүгә, тәбиғәткә заманса ҡараш булдырыуға өндәгән һәр саҡырыуын күтәреп ала. “Әлифба”, “Ҡыҙыл ҡәнәфер”, “Пионер рельстары” операциялары һөҙөмтәһендә 2000 тонналап иҫке ҡағыҙ йыйылып, 1 миллион 800 мең төп емеш-еләк һәм төрлө ағас ултыртыла. Ә Белорет-Шишмә тимер юлы өсөн 53 мең 155 тонна металл һынығы йыйыла.

1971 йылда “Башҡортостан пионеры” республиканың Яҙыусылар союзы менән берлектә йәш ижадсылар өсөн семинар ойоштора. Унда төрлө райондарҙан шиғыр, хикәйә, мәҡәлә яҙған утыҙға яҡын уҡыусы ҡатнаша. Гәзиттә яңы герой – Гөлниса барлыҡҡа килә.

1975 йылғы ҡоролоҡта гәзит “Сәтләүек” операцияһы үткәреп, мал аҙығы әҙерләүгә ҙур өлөш индерә. Сәтләүек йыйыуҙа айырыуса уңғанлыҡ күрһәткән уҡыусылар редакцияның Почет грамотаһы менән бүләкләнә.

1977 йылда “Башҡортостан пионеры” гәзите призына республика уҡыусылары араһында саңғы ярыштары үткәрелә башлай.

1980 йылда, гәзиттең сыға башлауына 50 йыл тулыу айҡанлы, III йәш хәбәрселәрҙең республика слеты үткәрелә. Ошо йылдың 6 мартында “Башҡортостан пионеры” РСФСР-ҙың Юғары Советы Президиумының Почет грамотаһы менән бүләкләнә.

1990 йылда йәш хәбәрселәрҙең IV слеты үткәрелә. Ул “Башҡортостан пионеры”ның 60 йыллығына арнала.

1991 йылдан гәзит “Йәншишмә” исеме менән сыға башлай. Ҡатмарлы осорҙа йәш быуынға рухи яҡтан матур, дөрөҫ тәрбиә биреүҙе үҙенең төп эш йүнәлеше итеп ала. Гәзиттә туған телде, үҙ халҡыңдың тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеүгә, әҙәп-әхлаҡҡа ҡағылышлы мәҡәләләр күберәк урын ала башлай.




1996 йылда “Йәншишмә” гәзите Башҡортостан Республикаһының Халыҡ мәғарифы министрлығы, Яҙыусылар союзы, “Аманат” журналы менән берлектә республика балаларының “Илһам” әҙәби-ижади семинарын уҙғара.

2000 йылдың 27 – 28 мартында “Йәншишмә” гәзите йәш хәбәрселәр семинары ойоштора. Унда ҡатнашыусыларға “Йәш хәбәрсе” танытмаһы һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырыла, тәжрибәле журналистар йәш ижадсыларға файҙалы кәңәштәрен бирә.

12 июлдә гәзиттең 5 меңенсе һаны донъя күрә.

2002 йылда “Йәншишмә” гәзите үҙенең Ғәбиҙулла Зарипов исемендәге премияһын булдыра. 1000 һум күләмендәге тәүге премия гәзиттең йәш хәбәрсеһе, Әбйәлил районы Ишкол мәктәбенән Айгиз Сафинға бирелә. Артабан да йыл һайын әүҙем яҙышыусы бер йәш хәбәрсегә ул даими тапшырыла килә.

2003 йылдан “Йәншишмә” төҫлө булып сыға башлай.


JƏŞ TƏÐƏVSE

## *Яҡын дуҫ*

**Күптәрҙең иң яҡын дуҫы –**
**Һин, һин бит ул, “Йәншишмә”!**
**Ҡыйын саҡта әйткәндәйһең:**
**“Бирешмә, дуҫ, бирешмә!”**

**Бар яҡтан да йәш быуындың**
**Һин – тоғро ярҙамсыһы,**
**Илһам толпарын эйәрләр**
**Иң тәүге майҙансығы.**

**Көнләшерлек һинең ғүмер,**
**Беләм, гел шулай булыр.**
**Кемдәр һине юлдаш итә,**
**Юлдары гелән уңыр.**

**Алһыу БАЙЕГЕТОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

# Силәбе өлкәһе

**Силәбе өлкәһе – Рәсәйҙә Башҡортостандан һуң башҡорттар күпләп йәшәгән икенсе төбәк. Ул Башҡортостандан көнсығышта, Урал тауҙарының Көнбайыш – Себер тигеҙлегенә сыҡҡан ерҙәрҙә урынлашҡан.**







Силәбе өлкәһе ерҙәре – башҡорттарҙың аҫаба биләмәләре. Ул ерҙәрҙе ныҡлап колонизациялау башҡорттар үҙ теләктәре менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылғас, көньяҡ Уралда күпләп баҡыр, тимер заводтары, алтын приискылары төҙөүҙән башлана. Яйыҡ йылғаһы буйлап Рәсәйҙең көнсығыш сиге үтә, унда ҡаҙаҡтарҙың баҫҡынына ҡаршы ҡәлғәләр барлыҡҡа килә.

1919 йылда унда Башҡорт Республикаһы составына ингән 40 меңдән ашыу башҡорт йәшәгән Арғаяш кантоны ойошторола. 1934 йылда ул Арғаяш башҡорт милли округына әйләндерелә. Әммә оҙаҡ та тормай, округ Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондарына бүленә лә, Силәбе өлкәһенә тапшырыла, ә 1943 йылда тағы ла бүленеш булып, башҡортар йәшәгән Сафакүл һәм Әлмән райондары Ҡурған өлкәһенә бирелә.

Башҡорттар Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка һәм башҡа райондарында йәшәй. Был төбәк – Ялан Ҡатай башҡорттарының аҫаба ерҙәре. Бынан тыш, Магнитогорск ҡалаһында ла башҡорттарҙың ҙур диаспораһы бар. Һуңғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса Силәбе өлкәһендә 166 мең башҡорт иҫәпләнгән.

Силәбе өлкәһендә өлкә башҡорттары ҡоролтайы ойошторолған, Арғаяш районында Башҡортостан телевидениеһы күрһәтә, Магнитогорскиҙа башҡорт телендә "Йәнтөйәк" телестудияһы асылған, Силәбе дәүләт университетының көнсығыш факультетында башҡорт теле уҡытыусылары әҙерләнә.



**ҺҮРӘТТӘ: Силәбе өлкәһенең Аҡбаш ауылындағы мәсет.**

«Хоҙай үҙе ҡыҙығыр...» Ш. Бабич





# ОХЛЕБИНИНО МӘМЕРЙӘҺЕ

Әҫем йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған тамағынан 1,5 саҡырым түбәндәрәк, Ағиҙелдең аҡ ташлы бейек ярында урынлашҡан был мәмерйә. Ул гипс ҡатламдарын ҡар һыуҙары йыуыу аша барлыҡҡа килгән, шуға ауыҙы тәрән соҡор эсендә.

200 метр оҙонлоғондағы мәмерйә тәүҙә 12 метр бейеклектәге, 25 метр киңлектәге зал булып башланып, артабан тарая бара. Эсендә ике бәләкәй күл бар, урта тирәләрәк гипс ҡалдыҡтары менән тулған ҡойо төҫмөрләнә.

Охлебинино ауылынан йәйәү барыу алыҫыраҡ булғанға, был мәмерйәлә күберәк Ағиҙел буйлап ағыусы туристар ғына туҡтала.






„АМАНАТ" журналы
йондоҙлоғо
2010


Артур Туҡтағолов










## Opel Meriva

Германияның бай тарихлы был автомобиленең яңы моделе – “Опель Мерива” дизайн үҙенсәлектәре менән иғтибарҙы йәлеп итә. Арттҡы ишектәрҙең алдан артҡа табан асылыуы ла водитель һәм пассажирҙар өсөн байтаҡ уңайлыҡтар тыуҙыра. Салон эсе иркен, унда төрлө өҫтәмәләр булыуы (мәҫәлән, стакан ултыртыу өсөн урындар, машинала кәрәк була торған әйберҙәрҙе һаҡлау ҡулайламалары һ. б.), артҡы урындарҙың йыйылмалы булыуы конструкторҙарҙың һәр деталде ентекле уйлағанлығын күрһәтә.

Ә техник һәм технологик сифаттар йәһәтенән был автомобиль үҙ класындағы техниканан бер ҙә ҡалышмай. Быйыл саҡ сығарыла башлаясаҡ был автомобиль төрлө төҫтәрҙә, хатта салонының эсе лә һатып алыусы һайлауы буйынса төҫтә тәҡдим ителәсәк.

## «Аманат» коллекцияһы




### Пётр Великий

1986 йылда “Юрий Андропов” исеме менән эшләнә башлап, 1998 йылда ул “Петр Великий” булып флот караптары сафына баҫа. Был донъяла иң ҙур (авианосец булмағандарҙан) хәрби крейсер.

Уның ҡеүәтле ҡоралдары дошмандың авианосецтарын юҡ итеү өсөн тәғәйенләнгән. Атом һәм дизель двигателдәрендә лә йөрөй алыуы уны тулыһынса һәм оҙаҡ ваҡытҡа үҙаллы итә. 250 метр оҙонлоғондағы карап сәғәтенә 32 узел (59 саҡырым) тиҙлектә йөрөй ала.

Ҡорал арсеналында беҙҙең Күмертау заводында етештерелгән ике К-27 вертолеттары ла бар.

635 кешелек экипажы карапта ике ай үҙаллы йәшәй ала. Крейсерҙа етештерелгән электр энергияһы 200 мең кешелек ҡаланы тәьмин итергә етер ине. Алты палубаһындағы коридоҙарҙың дөйөм оҙонлоғо 20 саҡырымдан ашыу. Карапта үҙенең кабель телевидениеһы бар.






# ЙЫРҘАРЫҢ КҮП ҺИНЕҢ, МОҢДАРЫҢ КҮП...

**“Далан” эстрада төркөмө күптән инде республикабыҙҙың йөҙөк ҡашына әйләнеп, моңло ла, дәртле лә йырҙары менән олоһоноң да, кеçеһенең дә күңелен яуланы. “Ай-һай, Салауат”(Р. Ғарипов һүҙҙәре), “Сал Урал”(С. Әлибай һүҙҙәре), “Бейеүсе ҡыҙға”(Д. Булгакова һүҙҙәре), “Ҡурай”(З. Ҡотлогилдина һүҙҙәре) йырҙарын бөтә мәктәптәрҙә лә тиерлек балалар яратып башҡара. Ә бит бик күптәр уларға көйҙө Башҡортостандың халыҡ артисы Артур Туктағолов ижад иткәнен белмәй, халыҡ көйө тип йөрөтәләр. Башҡорт халыҡ көйҙәрен дә, эстрада йырҙарын да юғары кимәлдә башҡарып, милли музыка, фольклорҙы уңышлы пропагандалаған төркөмдәр беҙҙә бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Шуға ла республикала үткән абруйлы мәҙәни сараларҙа “Далан” төркөмө иң көтөлгән, иң яратылған төркөм. Әлбиттә, төркөмдөң был уңыштары уның етәксеһе Артур Туктағоловтың тырышлығы, эҙләнеүҙәре менән бәйле. Бөгөн беҙ уның менән әңгәмә ҡорабыҙ.**

**– Артур, данлыҡлы “Каруанһарай”ҙы ҡалдырып, яңы төркөм төҙөүгә нимә этәрҙе һеҙҙе?**

– “Каруанһарай”ҙа эшләгәндә үҡ күңел түрендә үҙ төркөмөмдө ойоштороу теләге йәшәне, ошо уй тынғылыҡ бирмәне. Һәр нәмәнең үҙ мәле була тиҙәр бит, ижади яҡтан өлгөрөп, тәжрибә туплағас, теләкте тормошҡа ашырҙым. Исемен дә тиҙ таптыҡ, “далан” бәхет, уңыш тигәнде аңлата, беҙҙең яҡта ул һүҙ даими ҡулланыла, “даланлы кеше”, “даланы бар” тип һөйләйҙәр.

Быйыл беҙҙең эшмәкәрлеккә 10 йыл тула, бәләкәй генә юбилей. Ошо айҡанлы республика райондары, күрше өлкәләр буйлап гастролдәргә сығасаҡбыҙ, көҙгә Башҡорт дәүләт филармонияһында ҙур концерт көтөлә.

**– Артур, үҙегеҙ, атай-әсәйегеҙ, тыуған яҡтарығыҙ хаҡында ла һөйләгеҙсе.**

– Мин Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районындағы Ерекле ауылында тыуып үҫтем. Ғаиләлә 8 бала булдыҡ. Мин – иң кесеһе. Ғаиләбеҙҙә барыһы ла сәнғәт яратты. Әсәйем Хәйбулла районының Вәзәм ауылынан. Ул халыҡ йырҙарын оҫта башҡара торғайны. Бала саҡтан миңә лә йырҙар өйрәтте. Үҙе нык яратып башҡарған“Аҡтаныш таңдары” тигән йырын миңә өс йәштәр тирәһендә өйрәткән. “Таңдары” тигәнде “штандайы” тип йырлайым икән. Атай-әсәйем гел шуны көлөп иҫкә төшөрөр ине. Атайым тирә-яҡта оҫта бейеүсе һаналды, шуға бөтә ағай-апайҙарым уға оҡшап, бейеүгә маһир булды. Үҙемә килгәндә, гармун моңон яраттым, сөнки бер туған Фәрхетдин ағайым гармунда уйнаны. 10 йәшемдә ул миңә гармун бүләк итте.

**– Сәнғәт юлынан китергә бала саҡтан хыялландығыҙмы?**

– Эйе. Сурай мәктәбендә уҡығанда синыфташым, “Каруанһарай”ҙың элекке музыканты Әмир Тойғонов менән төркөм төҙөп, концерттарҙа ҡатнашып йөрөнөк. Башҡортостанда нишләп ансамблдәр юҡ икән, үҙем ҙур үҫкәс, төркөм төҙөйәсәкмен, тип хыяллана торғайным. Мин үҫкәндә ҡайҙа ул тере башҡорт йырсыларын күреү, улар миңә алланың үҙе кеүек тойола ине. Люция апайым Өфөнән пластинкалар алып ҡайтһа, шуларҙы тыңлап ҡына башҡортса йырҙар ота торғайным. Мәктәптән һуң Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу техникумының тынлы оркестр бүлегенә уҡырға индем. Краснодар ҡалаһына хәрби хеҙмәткә алынып, тынлы оркестрға етәкселек иттем. Тыуған яҡ, әсәй тураһындағы тәүге йырҙарымды армияла яҙҙым, улар рус телендә ине.

**– Ә башҡортса ижад иткән беренсе йырың нисек атала?**

– “Ай-һай Салауат”. “Каруанһарай” барлыҡҡа килгәс, тыуған ил, патриотик рухтағы йырҙар кәрәклеге асыҡланды. Аптыраған көндән үҙем көй яҙып ҡараным һәм ул бик популяр булып китте. Халҡым шәхестәргә бай, беҙ уларҙы данларға тейешбеҙ. “Ҡараһаҡал”, “Алдар батыр”, “Шаҡман Шәғәленең уландары”, “Зәки Вәлиди”, “Ҡайт иленә” кеүек йырҙарҙы тамашасы йылы ҡабул итте. Мәсәлән, күрше өлкәләрҙә, Себер яҡтарында гастролдәрҙә йөрөгәндә, “Ҡайт иленә”не йырлаһаҡ, тамашасылар күҙ йәштәрен тыя алмай илап ултыра.

**– Ғаиләгеҙ хаҡында ла бер нисә һүҙ...**

– Ҡатыным Миңзифа Искужина – йырсы. Иң тәүге тыңлаусым да, тәнҡитсем дә. Ике балабыҙ бар. Улыбыҙ Буранбай сауҙа-иҡтисад йүнәлеше буйынса белем алһа ла, рэп стилендә йырҙар яҙа. Былтыр “Йәшлек-шоу”ҙа ҡатнашып, дипломант булды. Ҡыҙыбыҙ Айһылыу 6 йәштә. Бейеүгә һәләте һиҙелә.

**– Киләсәккә ниндәй уй-маҡсаттар менән йәшәйһегеҙ?**

– Иң ҙур хыялыбыҙ – Рәсәй кимәленә сығыу, әүнең өсөн русса йырҙар кәрәк. Был йәһәттән тәүге аҙымдар яһалды ла инде. “Дикий мед”, “Девушки моей земли”, “Хоккейный клуб “Салават Юлаев” кеүек йырҙар ижад иттем.

**– Ихлас әңгәмәгеҙ өсөн ҙур рәхмәт, Артур! Ижад ҡомары, һаулыҡ, ғаилә именлеге теләйбеҙ һеҙгә.**

**Нурия ӘХТӘМОВА әңгәмәләште.**




# УЛТЫРА БЕЛЕҮ ҘӘ МӨҺИМ




**Компьютерҙар донъяһы шул тиклем ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс. Хатта ысынбарлыҡты онотоп юғалып ҡалаһың ...**

Виртуаль донъяға бирелеп китеп, мониторға инерҙәй булып, бөкрәйеп киткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалабыҙ. Башлана ла инде шунда организмда сәйер үҙгәрештәр...

Шул хәлдә оҙаҡ ултырһаң, иң тәүҙә уң ҡулдың сәтәкәй бармағы ойой башлай, яйлап бөтөн бар-



маҡтар “өшөргә” тотона, һуңынан ул аяҡ бармаҡтарына күсә, күҙ алды ҡараңғылана һәм мониторға ҡарауы ауырая башлай, елкә ауырта. Ни өсөн тик ултырғанда ла быңдай ауыртыуҙар тоябыҙ беҙ?

Быларҙың барыһы ла компьютер артында дөрөҫ ултырмауҙан килә.

Беренсенән, ҡағиҙә буйынса һеҙҙең клавиатура һәм манипулятор (“сысҡан”) терһәк кимәленән мотлаҡ аҫтараҡ ятырға тейеш. Сысҡан менән эшләгәндә усығыҙ уны тулыһынса уңайлы рәүештә ҡаплаһын, ә усты өҫтәлгә терәп, бармаҡ остары менән генә йөрөтмәгеҙ. Сөнки бармаҡ остарына ҡан йөрөшө туктай һәм ойоп, өшөй башлай.

Икенсенән, монитор менән күҙ араһы 70 сантиметрҙан кәм булмаҫҡа тейеш. Ултырғысҡа уңайлы ултырып, кәүҙәгеҙҙе тура тоторға тырышығыҙ ултырғысҡа арҡағыҙ менән һөйәлегеҙ.

Өсөнсөнән, 20 – 30 минут һайын өҫтәл артынан тороп ял итеп алығыҙ, еңелсә гимнастика яһағыҙ һәм мотлаҡ булмәгеҙҙе елләтергә онотмағыҙ.

Шулай иткәндә генә компьютерҙың үҙегеҙгә зыяны теймәҫ.



**Заһит ӘБИЛЕВ.**



# Айыу ғына ҡышын йоҡлаймы?




Оҙон йоҡоно беҙ барыбыҙ ҙа айыу менән сағыштырабыҙ. Ул, ябай әйткәндә, ҡышҡы йоҡоноң классик образы. Әммә беҙҙең яҡтарҙа ҡырыҫ һалҡын шарттарҙы тыныс ҡына йоҡлап үткәреүсе йәнлектәр күп: алйырҙан, һуҡыр сысҡан, әлгәнйәк, бурһыҡ һ. б. Ваҡ хайуандар, бөжәктәр тураһында әйтәһе лә түгел, уларҙың барыһы ла тиерлек көҙҙән яҙға тиклем анабиозға тала.

Шул уҡ ваҡытта һауанан ярайһы уҡ йылыраҡ булған һыуҙа ла ҡышын йоҡоға талыусы балыҡтар бар. Беҙҙең тирәлә улар - карп һәм аҡ амур. Улар бары йылы һыуҙа ғына йәшәй һәм үрсей. Көҙөн, һыу температураһы түбәнәйә башлағас ( иң һыуыҡ һыу ҙа беҙҙең ҡыҙлектән ҡарағанда йылы һанала, сөнки температураһы нолдән юғары), был балыҡтар тәрәнерәк ерҙе һайлап, ләмгә күмелә лә, анабиозға сума. Был ваҡытта уларҙың тәне көҙҙән туплаған май иҫәбенә йәшәй.

Беҙҙең яҡтарға ситтән килтерелгән ротан тигән балыҡ хатта боҙ менән ҡуша туңып ҡалырға ла һәләтле. Боҙ иреү менән ул, бөжәктәр һымаҡ, ҡабат йәнләнеп китә.



**Ротан**

Карп – сазандың бер төрө. Ул бик борон Ҡытайҙа барлыҡҡа килеп, донъяға таралып киткән. Күпселектә күлдәрҙә, быуаларҙа йәшәй. Карптың ашҡаҙаны юҡ, шуға уны, ауыҙына эләккән һәр нәмәне бер туҡтауһыҙ ашауына һәм һимеҙлегенә ҡарап, "һыу сусҡаһы" тип тә йөрөтәләр. Карпты быуа-күлдәрҙә үрсетәләр, ул бик тиҙ үҫә. Ике йәшенә еткәндә балыҡ ике килограмм тарта. Оҙаҡ йәшәгәндәре 1,5 метрға тиклем етеүҙәре ихтимал. Ҡышҡылыҡҡа ул ләмгә сума, тын алыуы ныҡ һирәгәйә, тәне лайла менән ҡаплана.



**Аҡ амур**

Аҡ амур – алыҫ көнсығыш йылғалары балығы, беҙҙең яҡтарға ул күсереп килтерелгән. Карп һымаҡ уҡ быуаларҙа үрсетелә. Аҡ амурҙы "үлән карпы" тип тә атайҙар, сөнки ул үлән аҙыҡтары менән туҡлана. Тап шул арҡала уның "санитар" тигән атамаһы ла бар, ул быуа-каналдарҙа ылымыҡтарҙы ашап, ҡоролмаларҙы таҙартыу эшен башҡара. Амур яй үҫә, биш йәшлек балыҡ 25 сантиметр, 2,5 кг ауырлыҡта була. Ныҡ ҙурайғандары, метрҙан ашып, 30 килограмға етеүе ихтимал. Ҡышҡылыҡҡа карп һымаҡ уҡ, соҡорораҡ урындарға йыйылып, тәнен лайла менән ҡаплап, анабиозға сума.

Ротан – кәүҙәгә ҙур булмаған, тышҡы ҡиәфәте шамбыға оҡшаш йыртҡыс балыҡ. Ул бик бәләкәй (10 см тирәһе) булғанлыҡтан, балыҡсылар уны тотмай. Күпселектә башҡа балыҡтарҙың ыуылдырығы, селбәрәләре, ваҡ ҡыҫала һымаҡтар, һөләктәр һәм башҡа һыу хайуандары менән туҡлана. Ваҡ һыу яткылыктарында күпләп үрсеп китһә, ул селбәрәләрен һәм ыуылдырығын юҡ итеп, ундағы башҡа балыҡтарҙы шул ҡырып бөтөүе лә ихтимал. Оло һыуҙарҙа ул үҙе ҙурыраҡ йыртҡыстарҙың ризығына әйләнә. Ротан һыу кибеп бөткәндә лә ләмгә сумып күпмелер ваҡыт иҫән ҡала ала, һыу төбөнә тиклем туңғанда ла иҫән сыға.



**Карп**

# Донъя тотҡаһы ул – сөй



**Ябай ғына сөй. Беҙ уға шул тиклем күнегеп бөткәнбеҙ, кәрәкмәгән мәлдәрендә (ә улар бик һирәк була), хатта уның барлығына, юҡлығына иғтибар ҙа итмәйбеҙ. Уйлап ҡараһаң, сөйһөҙ бер нимә лә эшләп булмай. Тирә-яғыбыҙға әйләнеп ҡарайыҡ әле – сөй булмаған ер юҡ: иҙәнде лә ул тота, ишек яһағанда күпме киткән, өй ҡыйығында һанап бөткөһөҙ, кәртә-ҡураға ниндәйе генә инмәгән... Булмаһа, был сығарылышта бер аҙ сөйҙәр тураһында һөйләшеп алайыҡ. Ата-бабаларыбыҙ борондан төрлө сөйҙәр ҡулланған. Тәүҙә улар ағастан яһалған. Уның өсөн имән, саған һымаҡ ныҡлылары һайланған. Боронғо торлаҡтар, ауылдар урынында баҡыр сөйҙәр ҙә, тимер сөйҙәр ҙә табыла. Әйткәндәй, ағас сөйҙәр беҙҙең көндәргә лә килеп еткән: балта, сүкеш һаплағанда ла сөй ҡағабыҙ, тәҙрә рамдары яһағанда ла ҡулланыла. Оҫталар өҫтәл, ултырғыс һымаҡ йорт йыһаздары эшләгәндә нәк ағас сөйҙәргә өҫтөнлөк бирә.**





Тимер сөйҙәр элек тимерлектә сүкелгән. Тимерҙе ҡыҙҙырып, бер яҡ башын ослағандар, ә икенсеһен төйөп “баш” яһағандар. Ә күпләп етештереү махсус станок-машина уйлап сығарылғас башланған. Ул XVIII быуат аҙағында Англияның Бирмингем ҡалаһында барлыҡҡа килә. Шунда уҡ тәүге сөй фабрикаһы асыла. Ә Рәсәйҙә сөйҙәрҙе күпләп 1872 йылда етештерә башлайҙар.

Сөй барлыҡҡа килгәндән бирле төп формаһын юғалтмаһа ла, әлегә тиклем камиллаштырыла килә. Хәҙер һатыуҙа ниндәйе генә юҡ! Мәҫәлән, ябай тимерҙән яһалғандан тыш, ҡыҙҙырылған, яндырылғандарын ғына алайыҡ. Ул шул тиклем ныҡлы, хатта кирбес стенаға ла үтеп инә. Беҙ күнегеп бөткән “дубел” дә шулай. Ә бына “плинтус” тип аталғаны, киреһенсә, нәҙек кенә, башы ла бөләкәй, ауыш итеп яһалған. Уны паркеттарҙы, нәҙек рейкаларҙы беркетеү өсөн файҙаланалар. Ҡаҡҡас, әйтерһең, сөй ҡағылмаған – нәҙек “эшләпә”һе ағасҡа инеп үк китә.

Шифер өсөн ҡулланылған сөйҙәрҙе лә беләһегеҙҙер. Эйе, уның ҙур эшләпәһе бар. Ә мебель сөйө һуң! Ах, матурҙар ҙа инде: эшләпәләре күренеп торһон өсөн махсус рәүештә төрлө һырҙар менән биҙәп эшләнгән.

Винтлы йәки һырлы сөйҙәр иһә ябай сөй һурылып сығыр урында ҡулланыла.

“Котоко” тип аталған япон фирмаһы пластик сөйҙәр етештерә башлаған. Уларҙың өҫтөнлөгө шунан ғибәрәт: тутыҡмайҙар һәм балта йөҙө, йышҡы бысағы эләккәндә лә үҙҙәре ағас урынына юнылып, йышылып торалар.

Германияла ла “серле” сөй уйлап тапҡандар. Уның “олоно” буйлап дүрт һыр үтә. Өҫтөнлөктәре: ябай сөйҙәргә ҡарағанда 10-12 процентҡа еңелдәр, ҡаҡҡас, һурылып бармайҙар.

Беҙ йыш ҡына магазинға барып: “Миңә “йөҙлө” йәки “йөҙ иллеле” сөй кәрәк” – тибеҙ. Ҡайһы эштә ниндәйе ҡулай икәнен самалап ҡарайбыҙ. Был һандар сөйҙөң оҙонлоғона ҡарап билдәләнә.

Әлбиттә, уларҙың да төрлө маркалары бар. Ләкин әҙәм балаһы компьютер түгел – барыһын да иҫләмәҫкә лә мөмкин. Тик магазинға йыйынғанда сөйҙөң ниндәй эш атҡарыу өсөн кәрәклеген, уға ҡайһы төрө яҡшыраҡ икәнен белеү генә мөһим.

**Махсус битте Рәлис Ураҙғолов алып бара.**



Ҡәҙерле дуҫтар! Яраткан рубрикағыҙҙы тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ итеп күргегеҙ киләме? Был күберәк һеҙҙең үҙегеҙҙән тора. Кескәй генә хатты ла үҙенсәлекле, матур итеп яҙып ебәрергә мөмкин тигән фекерҙәбеҙ. Йылайыр районынан Айгиз исемле малайҙың танышыу сәләмен уҡып ҡарағыҙ әле.

**Танышайыҡ**

*Әҙеһәмов Айгиз булам,*
*Уҡыйым алтынсыла.*
*Минең өсөн һәр дәрестә*
*Белем нуры асыла.*

*Туғандарға шатлыҡ булып*
*Тыуҙым мин алтын көҙҙә.*
*Шул тиклем ҙур уҫкем килә,*
*Йөрәгем сак-сак түҙә.*

*Милиция хеҙмәткәре*
*Булғым килә, ҙурайғас.*
*Тырышып белем алырмын –*
*Ошо һөнәр окшағас.*

Ошо адрес буйынса тиҫтерҙәремдән хат көтәм:
**453691, Йылайыр районы,**
**Һабыр ауылы,**
**Салауат Юлаев урамы, 108.**
**Тел.: 83475224161.**

***

14 йәш. Кәзәмөгөҙ. Музыка тыңларға, ырғаҡ менән бәйләргә яратам. 14-16 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат йәки смс-хәбәр көтәм.
**Сабитова Гөлнур.**
**453601, Әбйәлил районы, Таштимер ауылы,**
**Коммунистар урамы, 54.**
**Т.: 89068983662.**

***

Таныш булайыҡ: мин – Иҙел. 12 йәш. Музыка тыңларға һәм футбол уйнарға яратам. Йәштәштәрем менән танышҡым килә.
**Килдеғолов Иҙел.**
**453694, Йылайыр районы,**
**Балапан ауылы,**
**Ш. Бабич урамы, 14.**

***

11 йәш. һыуғояр. Йырсыларҙан Радик Юлъяҡшин, Илгиз Абдрахманов, Максим, Лера оҡшай. Кемгә 11 - 14 йәш, шуларҙан хат йәки шылтыратыуҙар көтәм.
**Шакирова Сафия.**
**453747, Учалы районы,**
**Мәҫкәү ауылы, Мәктәп урамы, 43.**
**Т.: 89613603140.**




***

13 йәш. Игеҙәктәр, музыка тыңларға, өй эштәре менән булырға яратам. 13-16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки смс-хәбәр көтәм.
**Исхаҡова Айгөл.**
**453064, Ғафури районы,**
**Сәйетбаба ауылы, Октябрь урамы, 3.**
**Т.: 89656404451.**

***

13 йәш. Оҡшаған музыканы ғына тыңларға яратам. Буш ваҡытта шиғырҙар яҙам һәм һүрәт төшөрәм. Ҡыҙ һәм егеттәрҙән смс-хәбәр көтәм.
**Мусина Эльза.**
**ICQ: 574697931.**

***

11 йәш. һыуғояр. Йырсыларҙан Радик Юлъяҡшин, Илгиз Абдрахманов, Максим, Лера оҡшай. Кемгә 11 - 14 йәш, шуларҙан хат йәки шылтыратыуҙар көтәм.
**Шакирова Сафия.**
**453747, Учалы районы,**
**Мәҫкәү ауылы, Мәктәп урамы, 43.**
**Т.: 89613603140.**

***

13 йәш. Балыҡ. Йырсыларҙан Серега оҡшай. Китап уҡырға, һүрәт төшөрөргә әүәҫмен. 13-15 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтәм.
**Зәйнетдинов Батыр.**
**453545, Белорет районы,**
**Мулдаҡай ауылы, Үҙәк урам, 16.**
**Т.: 89033121564.**

***

12 йәш. Ҡуҙы. Музыка тыңларға, бейергә, әхирәттәрем менән аралашырға яратам. Кумирҙарым: "Ранетки" төркөмө һәм Бейонс. 12-14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат йә смс-хәбәр көтәм.
**Ҡанабәкова Камила.**
**453390, Ейәнсура районы,**
**Үрге Муйнаҡ ауылы,**
**Мәктәп урамы, 10.**
**Т.: 89273396141.**

***

11 йәш. Саян. Буш ваҡытта китап уҡырға, һүрәт төшөрөргә, музыка тыңларға әүәҫмен. 11-13 йәшлек ҡыҙҙарҙан хат йәки смс-хәбәрҙәр көтәм.
**Шәйехова Эльвина.**
**452281, Илеш районы,**
**Ишҡар ауылы, Ленин урамы, 5.**
**Т.: 89279269544.**

# Шакай һылыуы

Ай, һылыу!



**Таныш булығыҙ: Ләйсән Йәнекәйева. Әбйәлил районы үҙәге Асҡарҙың 1-се урта мәктәбендә VIII “В” синыфта белем ала. Бөтә фәндәрҙән дә тик яҡшы билдәләргә өлгәшә. Башҡорт һәм рус теле дәрестәрен көтөп ала.**

**Бәләкәйҙән бейергә ярата. Асҡар сәнғәт мәктәбенең хореография бүлеген тамамлап, төбәк-ара, район конкурстарында ҡатнашып, призлы урындарға лайыҡ булды. Мәктәп тормошонда ла ихлас ҡатнаша. Киләсәктә телевидение дикторы булырға хыяллана.**



**Алһыу Юлдашбаева. Өфө ҡалаһынан:**

“Балалар ижады үҙәгенә йөрөп, һүрәт төшөрөргә, йырларға, сигеү сигергә өйрәнәм. Ҡышты айырыуса көтөп алам, сөнки саңғыла, конькиҙа шыуырға ятарам. Көн һайын катокка йөрөйөм, фигурист булырға теләйем.”



**Әлиә Аккужина. Йылайыр районының Йылайыр ауылынан:**

“Гел “бишле”гә өлгәшәм. Төрлө конкурстарҙа ҡатнашырға, китап уҡырға, башватҡыстар сисергә ятарам. Былтыр патриотик йырҙарҙы йәш башҡарыусыларҙың Өфөлә үткән “Еңеү яҙы” конкурсында ҡатнашып, еңеү яуланым. Ғаиләбеҙ менән спортҡа ғашиҡбыҙ, районда беҙҙе барыһы ла “спортсы ғаилә” тип белә.”



**Рүзилә Бикәнова. Ейәнсура районының Ярғайыш ауылынан:**

“6-сы синыфта уҡып йөрөйөм. Йырларға, бейергә, айырыуса көнсығыш бейеүҙәрен башҡарырға ятарам. Хыялым – йырсы булыу.”



**Ҡәҙриә Баһауетдинова. Әбйәлил районының Хәмит ауылынан:**

“11-се синыфта белем алам. Химия, алгебра дәрестәре оҡшай. 2006 йылда Өфөлә уҙғарылған Президент шыршыһы байрамында ла ҡатнаштым. Шөғөлдәрем төрлө-төрлө: бейеү, мәрйен теҙеү, бешеренеү, шиғыр яҙыу.”




«Шәп малай» конкурсының ғинуар айының еңеүселәре тип дөрөҫ яуаптарҙы беренсе булып ебәргән **Салауат районының Малаяҙ ауылынан Валерий Ғәлиевты** һәм **Тәтешле районының Аксәйет ауылынан Илнур Фәтхетдиновты** иғлан итәбеҙ. Афарин!

**Дөрөҫ яуаптар (№01-2010)**

1. Бутан,
2. Кения,
3. Никарагуа,
4. Филлипины,
5. Сальвадор,
6. Словения,
7. Самоа,
8. Шри-Ланка,
9. Венесуэла,
10. Конго.

Ә был флагтарҙың ҡайһы илдәрҙеке икәнен, йә, кем беренсе белер һәм хәбәр итеп өлгөрөр – шул еңеүсе!

Һеҙҙән хаттар һәм телефон аша хәбәрҙәр көтәбеҙ!

СМС-хәбәр ебәрер өсөн кеҫә телефонынан 3443 номерын һәм «Малай» префиксын йыйырға кәрәк.




Префикс: “Малай”

# БӘХЕТЕҢӘ ҠАРШЫ БАР




“Серле йондоҙ”ҙоң хатын (№ 1, 2010) уҡып сыҡҡас, яуап яҙырға булдым. Был хат мине үткәндәрҙә тороп ҡалған хыялый үҫмерлек иленә алып ҡайтҡандай булды. Мендәргә ҡапланып илауҙар, өмөтләнеп көтөүҙәр, һөйөү-һөйөләүҙәр...

Үҫмер күңеле бигерәк хисле була. Битарафлыҡ кәртәләренә килеп бәрелеү менән әрнеү-һыҡтауҙарға бирелә. Әҙ генә йылылыҡ тойһа, ирей ҙә китә. Хаттан күренеүенсә, “Серле йондоҙ” ҙа билдәһеҙлек шауҡымында ҡалған. Уға ҡарата егет кеше битараф булһа ла икеһе араларын бәйләргә тырышыуы ла һиҙелә. Был уның да юғалып ҡалыуына, билдәһеҙлеккә бирелеүенә бәйлелер. Әгәр ҙә ул ҡыҙҙы бөтөнләй яҡын күрмәһә, осрашыуҙар эҙләмәҫ, шылтыратмаҫ ине.

“Серле йондоҙ”ға кеше һүҙенә бик ышанып бармаҫҡа, һәр бер әйтелгән һүҙҙе йөрәгенә яҡын алмаҫҡа кәңәш итер инем.

Әхирәтеңдең: “Бер көн оҙатҡанға ымһынып йөрөмәһен!” – тип әйтте тиеүенә ышанып, шикләнеп ултырыуың дөрөҫ түгел.

Һеҙҙең икегеҙгә лә бар шиктәрҙе ситкә ҡуйып, күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшергә кәрәк. Телефон аша ғына бер нәмәне лә хәл итеп булмай.

“Серле йондоҙ”, бар шиктәреңдән арын да, күңел ҡушыуы буйынса эш ит. Аң әйткәнен дә тыңларға онотма, әлбиттә.


*Шылтыратыуҙар көтәм*

Ул беҙҙең мәктәптә туғыҙ йыл уҡыны. Тәүҙә мин уға битараф булдым. Ул миңә бар ни, юҡ ни ине. Ләкин бер йәйге кистән һуң битарафлыҡ юғалды, гел уны күргем килде.

Ул кистә беҙҙә мәжлес ине. Әхирәтем, ай-вайыма ҡарамай, урамға алып сыҡты һәм уларҙың ҡапҡа төбөндә егеттәрҙе көтөп торорға ҡушты. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ул, дуҫын эйәртеп, килеп тә сыҡты. Дуҫы – әхирәтемде, ә ул мине ҡосаҡлап алды ла, тыҡрыҡ буйына алып инеп китте. Мин тәүҙә ысҡынырға маташтым, ләкин өшөүҙән уға һыйынырға мәжбүр булдым.

Икенсе кистә беҙ тағы ла сыҡтыҡ, әммә улар сыҡманы.

Бер аҙнанан һуң уға ғашиҡ булғанымды һиҙҙем. Хис-тойғоларымды смс-хәбәр итеп ебәрҙем. “Онот, мин һинең менән йөрөмәйем бит” – тигән яуап килде. Быны уҡығас, мендәргә ҡапланып иланым һәм бүтән урамға сыҡмаҫҡа тигән ҡарарға килдем.

Ҡыш еткәс, ул миңә шылтыратты. Шунан башлап дуҫтарса ғына әңгәмәләшә башланыҡ.

Бер кистә әхиртем менән урамға сыҡтыҡ. Улар беҙҙе тағы оҙатып ҡуйҙы. Ул мине оҙаҡ ҡуйынынан ысҡындырмай торҙо. Шул минуттарҙа минән дә бәхетлерәк кеше юҡ кеүек тойолдо. Беҙҙең аралар яҡынайған һымаҡ булды...

Икенсе көндө ул мин ҡайтып киткәс кенә сыҡҡан һәм әхирәтемә: “Бер көн оҙатҡанға ымһынып йөрөмәһен!” – тигән. Быны ишетеү миңә бигерәк ауыр булды.

Шулай көндәр, айҙар үтте. Бер ваҡыт ул миңә тағы шылтырата башланы. Урамға саҡыра. Сыҡҡым килһә лә, сыҡмайым. Бер көн оҙатыр ҙа, икенсе көнөнә тағы арттан һөйләр, тип ҡурҡам. Тиҙерәк онотор өсөн “бүтән шылтыратма” тинем. Ысынлап та, шылтыратмай хәҙер, әммә үҙем һаман шылтыратыуҙар көтәм. Хат аша булһа ла эс-серҙәрен асыр, тип өмөтләнәм.

Әсәйемә быны һөйләр инем, ул мине аңламай, әхирәтемә ышанмайым. Мине тик уның дуҫы ғына аңлай, шикелле. Ул беҙҙе нисек тә ҡауыштырыу яғында, ләкин килеп сыҡмай. Бәлки, һеҙҙең арағыҙҙан миңә кәңәш биреүселәр булыр?

**СЕРЛЕ ЙОНДОҘ.**

*– Онот уны! Башҡа бер ҡасан да ...*

*йәшерәм. Их, мин иҫәр, ҡапыл ...*

Егет халҡы кире ҡағыу алдында, ғәҙәттә, албырғап ҡалыусан. Оҡшатып йөрөгән кешеңә “бүтән шылтыратма” тигәнһең икән, тимәк, уның да күңелен ҡыйғанһың. Ул, моғайын да, һинең тағы кире ҡағыуыңдан ҡурҡа, шуға ла шылтыратмайҙыр.

“Серле йондоҙ”, әгәр ул һине яратһа, мотлаҡ шылтыратасаҡ. Уны ысын күңелдән оҡшатаһың икән, бер нимәгә ҡарамай, бәхетеңә ҡаршы бар. Араларҙы бәйләү өсөн, уға иғтибар билдәләре күрһәтә алаһың. Әйтәйек, яғымлы йылмайыулы ҡараш, йә булмаһа бәләкәй генә открытка, моғайын да, иғтибарынан ситтә ҡалмаҫ.

**Иң изге теләктәр теләп ҡалыусы**
**ГӨЛСӘСКӘ апайың.**

# ҺӨЙӨҮ УТТАРЫНДА ЯНАМ



Ай һайын “Аманат” журналын көтөп алам һәм ҡат-ҡат “Мәңгелек сер” рубрикаһын уҡып сығам. Ниһайәт, үҙем дә яҙырға батырсылыҡ иттем.

Йәйҙең бер көнөндә автобустан ауылыбыҙға бер егет килеп төштө. Мин уны күптән белә инем. Исеме – Р. Кисен ул дискотекаға сыҡты. Әсәйем мине, әле бәләкәсһең, тип сығарманы. Мин ул саҡта 5-се синыфты ғына тамамлағайным.

Ул беҙҙең ауылға һирәк кенә килә торғайны. 2006 йылдың яҙында Р.-ны армияға алдылар. Уны оҙатҡан саҡта нисек өҙөлөп һөйгәнемде аңланым.

Хәҙер беҙ йыш күрешәбеҙ. Минең уны һөйөп йөрөүемде Р. ла, башҡалар ҙа белмәй.

Бер ваҡыт маршрут автобусында ҡалаға бергә килдек. Ул миңә ҡарап-ҡарап ала ине һәм аҙаҡ эргәмә килеп ултырҙы. Аҙыраҡ һөйләшеп барғас, алдына ултыртты ла ҡолағыма шыбырлап ҡына: “Минең һине үбеп алғым килә,” – тине. Оялыуымдан бер нәмә лә өндәшмәнем. Тик ошонан һуң һөйөү тойғоларым тағы ла нығыраҡ көсәйҙе.

Минән башҡа Р.-ны тағы ла бер ҡыҙ оҡшатҡан. Миңә ни эшләргә, зинһар, кәңәш бирегеҙ.

**РҮЗИЛӘ.**

# Ил ижады - аҫылташ

Ижад эше яңғыҙлыкты ярата, тигән әйтем бар. Ләкин беҙ күмәк көс менән ижад ителгән тамашалар, ҡыҙыҡлы нәмәләр, уйлап табылған үҙенсәлекле әйберҙәр менән дә танышбыҙ. Һәр хәлдә, был эштә ҡатнашыу үҙе үк кеше өсөн мауыҡтырғыс шөғөлгә әйләнә. Әленән-әле теге йә был баҫмала ҡыҙыҡ һүрәткә тапҡыр яуап табыу, бер һүрәткә ҡарап хикәйә төҙөү кеүек конкурстар сығып тороуы ла быны иҫбатлай. Ә тотош халыҡ быуаттар буйы барлыҡҡа килтергән ижад өлгөләре ниндәй?!

Ошоно күҙ уңында тотоп, "Аманат" үҙ уҡыусыларына (бала һәм оло булыуына ҡарамай) шундай уҡ уйын тәҡдим итергә булды. Шарттары былай.

Ошонда бирелгән һүрәткә ҡарап һәм бирелгән тәүге һөйләмде ҡулланып, һеҙ уның артабан дауам иткән сюжетын (буласаҡ ваҡиғалар теҙмәһен) уйлап сығарырға тейешһегеҙ. Тотош хикәйә яҙып ултырмаһағыҙ ҙа була, сөнки ул артабан һеҙ уйлағандан бөтөнләй икенсе яҡҡа сығып китеүе бар. Һеҙҙән килгән өлгөләрҙе ҡарағас, беҙ редакцияла иң ҡыҙыҡлыһын, мажаралы һәм фәһемлеһен һайлап алып, хикәйәнең тәүге өлөшөн яҙасаҡбыҙ һәм журналда баҫтырасаҡбыҙ.

Әлбиттә, унда кемдәрҙең сюжеттары ҡуланылғаны әйтеп үтелер, юғиһә коллектив хеҙмәт емеше икәнен ҡайҙан беләһең? Уны уҡығас, һеҙ артабанғы ваҡиғаларҙы күҙалларға һәм беҙгә ебәрергә тейеш булаһығыҙ. Ана шулай дауам итеп, йыл аҙағына беҙ күмәкләп, бәлки, ҙур һәм ҡыҙыҡлы бер китап яҙып ташларбыҙ?

**Талаптар ябай:**

– ҡыҫҡалыҡ – һәләт билдәһе;

– быға тиклем донъя күргән әҫәрҙәрҙәге сюжеттарҙы ҡабатлау тәбрикләнмәй;

– ни тиклем юғарыға ынтылһаң да, ер тормошонан айырылма;

– башланған эш – бөткән эш.



Уйыныбыҙ йыл аҙағына тиклем барасаҡ. Бер нисә һандан һуң, тәүге ярты йыллыҡтағы башланғыс йомғаҡтары төйөнләнә башлағас, бәлки, шарттарға үҙгәрештәр ҙә индерербеҙ. Әлегә иһә – әйҙәгеҙ, ҡәләмдәрҙе ослағыҙ ҙа, күңел елкәндәрен елдәр иркенлегенә тапшырып, еңдәрҙе һыҙғанығыҙ.

**Шулай итеп, баш һөйләм: Йәмле йәйҙең ихлас бер таңында Айнур, Гөлнур һәм Илнур тәғәйен генә маҡсат менән йыраҡ булмаған сәйәхәткә йыйынды.**

## Хикмәтле һүрәтең хикмәте низә?

"Аманат"тың былтырғы ноябрь һанында серле һүрәт тышлыҡта дүртенсе урынына хикмәтле һүрәт сығарып, уның һеҙөмтәләре тураһында аҙағыраҡ хәбәр итергә вәғәҙәләгәйнек. Әйтергә кәрәк, килгән яуаптар араһында был шифрланған лотереяны сисә алыусылар табылманы. Күрһәтелгән дүрт абзацтағы һүҙҙәр араһынан беҙгә ниндәй генә һөйләмдәр төҙөп ебәрмәнеләр, әммә... тап өҫтөнә баҫыусылар табылманы. Ә ул ябай ғына һөйләм ине: "**унан беҙгә хат килә**" (тикшереп ҡарай алаһығыҙ).

Икенсе юлы беҙ был мәсьәләнең шарттарын бер аҙ ябайлаштыра төшөрбөҙ, моғайын. Килешерһегеҙ, яуабын табып булмаған мәсьәләне сисеүе лә ҡыҙыҡ түгел. Ул мәсьәлә май һанында донъя күрәсәк һәм июль айында яуабы баҫыласаҡ.

# “Ватан һуғышы” ордены

**“Ватан һуғышы” ордены – Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында барлыкка килгән хәрби ордендарҙың тәүгеһе. 1942 йылдың 10 апрелендә Сталин Ҡыҙыл Армияның тыл начальнигы генерал Хрулевҡа немецтарға ҡаршы һуғышта ҡаһарманлыҡ күрһәткән хәрбиҙәрҙе бүләкләү өсөн орден проектын эшләргә ҡуша. Тәүҙә уны “За военную доблесть” тип атарға уйлайҙар. Был эшкә “За отвагу”, “За боевые заслуги” миҙалдарының авторы рәссам С. Г. Дмитриевты йәлеп итәләр. Ике тәүлектән һуң ордендың тәүге эскиздары әҙер була. 1942 йылдың 18 апрелендә орден өлгөләре Сталинға күрһәтелә.**

“Ватан һуғышы” ордены СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән 1942 йылдың 20 майында булдырыла. Ул ике дәрәжәлә эшләнә.



Орден ҡыҙыл эмаль менән ялатылған биш ҡырлы йондоҙ рәүешендә эшләнгән. Уның артында (йондоҙҙоң ҡырҙарынан) ялтыратылған биш ҡырлы йондоҙ рәүешендә алтын нурҙар һибелеп тора.

“Ватан һуғышы” орденының беренсе дәрәжәһе алтын менән көмөштән эшләнгән булһа, ә икенсеһе – көмөштән. Икенсе дәрәжәләге орденда, беренсеһенән айырмалы рәүештә, нурҙар алтын менән ялатылмаған. Ҡағиҙә буйынса “Ватан һуғышы” орденын түштең уң яғында тағып йөрөр булғандар.

Беренсе булып был орден 1942 йылдың 2 июнендә батырлыҡ күрһәткән артиллеристар капитан Криклий И. И., кесе политрук Стаценко И. К., өлкән сержант Смирновҡа тапшырыла. 1942 йылдың майында капитан Криклий командалыҡ иткән дивизион Харьков янында ике көн эсендә дошмандың 32 танкыһын юҡ итә. Өлкән сержант яралы рәүештә бер үҙе (расчеттың ҡалған яугирҙары һәләк була) 6 дошман танкыһын ҡыйрата. Дивизион комиссары Стаценко командалыҡ итеү менән генә сикләнмәй, үҙе лә бер-ике дошман бронемашинаһын юҡ итеп һалдаттарҙы рухландыра.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында был ордендың беренсе дәрәжәһе – 324903, ә икенсе дәрәжәһе 951652 яугирға тапшырыла. Һуғыштан һуң да “Ватан һуғышы” ордены менән бүләкләү дауам итә. Тик 1947 йылда ғына туктатыла.

Н. С. Хрущев (1956–1964 йылдар) СССР менән етәкселек иткән осорҙа был йола яңынан тергеҙелә. Орден менән Ҡыҙыл Армия сафтарында һуғышҡан сит ил граждандары наградлана.

Л. И. Брежнев осоронда (1964–1982) “Ватан һуғышы” ордены менән ҡалалар бүләкләнә. Был орденға Воронеж (1975), Наро-Фоминск (1976), Орел, Белгород, Могилев, Курск (1980), Ельня, Туапсе (1981), Мурманск, Ростов-на Дону, Феодосия (1982) һ.б. ҡалалар лайыҡ була.

1985 йылда Бөйөк Еңеүҙең 40 йыллығы айҡанлы һәр һуғыш ветераны ошо орден менән бүләкләнде.

1992 йылдың ғинуарына тиклем барлығы 2487098 1-се дәрәжәләге һәм 6688497 2-се дәрәжәләге “Ватан һуғышы” ордендары тапшырылған.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**“Башҡорт энциклопедияһы” ғилми нәшриәтенең тарих булеге мөдире.**

23 февраль — Ватанды һаҡлаусылар көнө

# ҠАЙҘАН һИН, МАТРОСОВ?



**Билдәле журналист Рәүеф Насировтың “Ҡайҙан һин, Матросов?” исемле китабы аша халыҡ Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында ҡаһарманлыҡ символына әйләнгән Александр Матросовтың башҡорт малайы – Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов икәнен белде.**

Шакирйән Мөхәмәтйәнов 1924 йылда Учалы районының Ҡунаҡбай ауылында, граждандар һуғышынан яраланып ҡайтҡан Юныс Йосопов ғаиләһендә тыуа. Ул заманда ҡабул ителгәнсә, уны олатаһы исеме буйынса Мөхәмәтйәнов тип яҙҙыралар.

Әсәһе үлеп, үгәй әсәй ҡулында ҡалғас, Шакирйән өйҙән ҡасып сығып китә. Яҙмыш юлдары уны Ульяновск өлкәһендәге Днепропетровск ҡалаһындағы балалар йортона юлыҡтыра. Ул саҡта бар илде тултырған берәҙәктәр араһында ҡабул ителгән яҙылмаған ҡанун буйынса, балалар милицияға эләкһә, үҙҙәрен урыҫ итеп күрһәтергә тырыша, сөнки башҡа милләттәр ҡыйыһытылыуға дусар ителә. Шулай итеп, Шакирйән Мөхәмәтйәнов Шурик, йәғни Александр булып китә, ә фамилияһын, Мөхәмәтйәновҡа оҡшатып, Матросов тип ала. Рәсми документтарҙа уның тыуған урыны ла Днепропетровск ҡалаһы тип яҙыла.

Бер нисә балалар йортон, колонияларҙы алыштырып, 1940 йылда Шакирйән Өфө ҡалаһындағы балалар колонияһына килеп эләгә. 1942 йылда ул армияға алына һәм Ырымбур янындағы Краснохолм пехота училищеһына ебәрелә. Әммә офицер булып китергә яҙмай, 1943 йылда курсанттарҙы рядовой сифатында фронтка оҙаталар.

1943 йылдың 27 февралендә 2-се батальон Псков өлкәһенең Локнянский районындағы Чернушки ауылына һөжүм итергә бойороҡ ала. Ауыл ситендә батальонды өс нығытылған ут нөктәһе – дзот (деревянно-земляная огневая точка) ҡаршылай. Икәүһен юҡ итәләр, ә өсөнсөһө, һаман ут сәсеп, һуғышсыларҙы ҡарға ялпаштыра. Үҙ теләге менән дзотты юҡ итергә киткән Шакирйән, гранаталарын ташлап һәм патрондарын атып бөтөргәс, дзот амбразураһын үҙ кәүҙәһе менән ҡаплай. 19 июндә уға үлгәндән һуң Советтар Союзы геройы исеме бирелә.

Батырлыҡ һәм үлемһеҙлек символына әйләнгән Матросов – Мөхәмәтйәновҡа һәйкәлдәр илебеҙҙең тиҫтәнән ашыу ҡала һәм ауылында ҡуйылған. Башҡортостанда ғына улар дүртәү: Өфөнөң А.Матросов баҡсаһында **(тышлыҡтағы фотола)**, Еңеү паркында, Ишембай ҡалаһында һәм тыуған ауылы – Учалы районының Ҡунаҡбай ауылында **(биттәге фотола)**. Бик күп урындарҙа урамдар, парктар, мәҙәниәт йорттары уның исеме менән аталған.

Александр Матросовҡа тиклем үҙ кәүҙәһе менән дошман амбразураһын ҡаплаусылар 98 кеше була. Ә барлығы Бөйөк Ватан һуғышы барышында 400-ҙән ашыу кеше Матросовтың батырлығын ҡабатлай. Тап уның батырлығының ошондай ҡаһарманлыҡтарҙың символына әйләнеүенә уның хаҡында донесениеның Сталин күҙенә эләгеүе сәбәпсе була. Уның 1943 йылдың 8 сентябрендәге 269-сы бойороғонда былай тиелә: ”Иптәш Матросовтың бөйөк подвигы Ҡыҙыл Армияның бөтә һуғышсылары өсөн дә хәрби ҡаһарманлыҡ һәм батырлыҡ миҫалы булып хеҙмәт итергә тейеш”. Шул бойороҡ менән 254-се гвардия уксы полкына Александр Матросов исеме бирелә, уның исеме 2-се батальондың 1-се ротаһы исемлегенә мәңгелеккә теркәп ҡуйыла.

Исеме тыуған ил хаҡына фиҙакәр ҡаһарманлыҡ образы булып бөтә илгә таралған, әммә үҙе хаҡында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт ҡалдырмаған, шуға күрә биографияһы бик күп символик һәм яһалма күрһәткестәр менән тулып, әҙәби һәм документаль китаптарға инеп бөткән геройҙың ысын исемен, сығышын тергеҙеү буйынса ғәйәт ҙур эш башҡарып сыҡҡан журналист Рәүеф Хәй улы Насировтың тырышлығын да ҡаһарманлыҡҡа тиңләрлек. Был юлдарҙа уның ниндәй ауырлыҡтар кисергәне, кемдәр менән осрашҡаны, ҡайҙан ниндәй документтар һәм мәғлүмәттәр табыуы тураһында яҙмалары башҡорт һәм рус телдәрендә китап булып сығып, халыҡҡа тарихтың тағы бер битен асты.



# Вертикаль тормош - сноуборд

**Сноубординг (инглиз һүҙе snowboarding)** – экстремаль спорт төрө, тау саңғылары кеүек бейек текә тау битләүҙәренән шыуып төшөүҙән ғибәрәт. Уны яратыусылар йәй көндәре лә юғалып ҡалмай: оҡшаш спорт төрҙәре менән, мәҫәлән, сүл бархандарынан шыуып төшөү (сэндбординг), диңгеҙ тулҡындарында шыуыу (серфинг) менән мауыға.

## Сноубординг төрҙәре:

**Ҡаты сноубординг** – махсус ҡорамалдар ҡулланып, юғары тиҙлектә алдан әҙер булған трассаларҙан шыуыу (рэйсинг, карвинг һ. б).

**Спорт – сноубординг** – тауҙан шыуып төшөү ҡағиҙәләре, ҡәтғи үтәлгән төрҙәр, мәҫәлән: бордеркросс, слалом, параллель слалом, гигант-слалом, параллельный слалом-гигант, супергигант.

**Фрирайд (инглиз һүҙе Freeride)** – әҙер булмаған тау битләүҙәренән үҙ-аллы шыуып төшөү.

**Фристайл (инглиз һүҙе Freestyle)** – акробатик трюктар эшләр өсөн махсус әҙерләнгән юлдан шыуып төшөү. Мәҫәлән, хаф-пайп (инглиз һүҙе half-pipe), биг-эйр (инглиз һүҙе big-air), слоуп-стайл (инглиз һүҙе slope-style) һ.б.

## Сноуборд тарихынан

Сноубордҡа оҡшаған беренсе ҡорамалды – **снёрфер (snurfer – һүҙе, snow («ҡар») һәм surf – «сёрф»)**, АҠШ-тың Мускегон ҡалаһында 1965 йылда Шерман Поппен ҡыҙына эшләп биргән. Ул ике саңғыны бергә йәбештереп, яңы снаряд уйлап тапҡан.

1979 йылда АҠШ-тың Мичиган штатындағы Гранд Рапидс ҡалаһы янында снёрфинг буйынса беренсе Донъя чемпионаты уҙғарыла. 1984 йыл Халыҡ-ара сноуборд ассоциацияһы асыла (ISA).

Сноуборд шул тиклем популяр булып киткәс, артабан айырым спорт төрө итеп таныла һәм 1985 йылда Австрия тау саңғылары курорты Цюрста беренсе Донъя кубогы уйнатыла.

Был сит ил саңғыһы Рәсәйгә 1988 йылда килеп инә, уны билдәле футбол комментаторы Владимир Маслаченко алып ҡайта.

Сноуборд һөйөүселәр һаны 2004 йылда донъяла 6,6 миллион тирәһе булған. Ә 2008 йылға был һан 5,1 миллионға тиклем кәмей, ә ҡатын-ҡыҙҙар дөйөм һандарҙың 25 процентын тәшкил итә.

Был спорт төрөн һөйөүселәрҙең уртаса йәше – 14 йәштән 24 йәшкә тиклем.





# Благовар районы





Благовар районы – боронғо Мең ырыуы башҡорттарының аҫаба биләмәһе. Үҙәге – Языково ауылы. Районда 88 ауылда 25 мең кеше йәшәй. Район буйлап Сәрмәсән һәм Ҡармасан йылғалары аға.



Гербы районда ауыл хужалығы үҫешкәнлеген күрһәтә. Йәшел фондағы алтын иген башағы осондағы йәшел шар эсенән күккә атылған һабантурғай төшөрөлгән. Ике яҡ ситтән төшөрөлгән ике көмөш һыҙат районды һыулаған Сәрмәсән һәм Ҡармасан йылғалары символдары.

Икмәк район иҡтисадының нигеҙен генә түгел, кешеләрҙең муллығын, тормош етешлеген дә билдәләй. Алтын иген бөртөктәре – Благовар ерендә йәшәүсе күп милләттәрҙең берҙәмлеккә ынтылышын күрһәтеүсе билдә. Күккә ынтылыусы һабантурғай күңелдәрҙә һәр ваҡыт яҙ, тәбиғәт уяныуы, тирә-яҡтың йыр-моңға тулыуы образы булып тора. Иртәнән кискә тиклем баҫыуҙарҙа эшләгән кешегә уның йыры етеш тормошҡа ынтылыш сағылышы булып тора.

Авторы – Тәлғәт Мәсәлимов.





*Учи языки - протяни руку целому миру!*

"АМАНАТ" энциклопедияһы

## 21 февраль – Халыҡ-ара туған телдәр көнө

# САФ ПОЛИГЛОТТАР БУЛМАЙ

**Шулай тип иҫбатлай фән. Бактиһәң, кеше мейеһенең төҙөлөш үҙенсәлегенә ярашлы, нисәмә телде ни тиклем камил белһә лә, аңда барыбер бер тел өҫтөнлөк итә, имеш. Шуға, ғәҙәттә, кеше ҡайһы телдә уйлай, шул телде яҡшыраҡ белә, тигән ҡараш йәшәй. Ләкин күнекмәләр ярҙамында кеше бер нисә телдә уйлау сифатын да үҙләштерә ала икән. Ул саҡта ҡайһы телде күберәк файҙалана, шул тел өҫтөнлөк итә башлай.**

**Биш йәшкә тиклем баланы ике телгә өйрәтеү – уның психикаһын боҙоу ғына, тип һанай белгестәр. Был ваҡытта уның ата-әсә аралашҡан телдә һөйләшеүе эргә-тирә донъяһын танып белергә ныҒыраҡ булышлыҡ итәсәк. Ә бына ун йәштән һуң иһә, киреһенсә, бала ни тиклем өйрәнһә лә, икенсе телде туған телеләй яҡшы үҙләштерә алмаясаҡ. Уның өсөн ул бик яҡшы белгән, әммә барыбер сит тел булып ҡаласаҡ. Бының да әллә ни зыяны юҡ – күпселек полиглоттар бер телдә уйлап, мейеһендә уны автоматик рәүештә кәрәк телгә ауҙарыу аша һөйләшә. Йәғни, һәр полиглот кеше ул – асылда бер нисә “һүҙлек тупланмаһы”.**

Ер шарында 6 мең төрлө тел бар. Әммә улар өҙлөкһөҙ кәмей. Тап шуларҙы һаҡлау, үҫтереү маҡсатында ЮНЕСКО 2000 йылда Халыҡ-ара туған телдәр көнөн айырым билдәләй башланы. ЮНЕСКО тарафынан нәшер ителгән Донъя телдәре атласында юҡҡа сығыу сигенә килеп еткән телдәр араһында беҙҙең илдәге себер халыҡтары телдәре айырым бүлекте биләй.

Әммә дәүләт сәйәсәте дөрөҫ алып барылған осраҡта телдәрҙе һаҡлап ҡалыу ғына түгел, хатта юҡҡа сыҡҡандарын да тергеҙеп була икән. Мәҫәлән, Японияның Хоккайдо утрауындағы айну телендә уҙған быуаттың 80-се йылдарында барлығы һигеҙ кеше генә һөйләшкән. Дәүләттең әүҙем ярҙамында хәҙер был тел тергеҙелә башлаған. Англияла корник тигән милләт теле 1777 йылда уҡ юҡҡа сыҡҡан тип һаналған. Хөкүмәт күргән төрлө саралар арҡаһында был телдә хәҙер меңләп кеше аралаша башлаған. Күптән юҡҡа сыҡҡан латин теле лә бар донъяла ғилми аралашыу теле булып киткән.

Ғөмүмән, кеше ни тиклем күберәк телде өйрәнә, ул шул тиклем күпте белә. Сөнки тел менән бергә шул халыҡтың мәҙәниәте, тарихы, көнкүреше һәм ғөрөф-йолалары ла керә. Аралашыуҙар аша бер халыҡтың теленә икенсе милләттең лексиконы ла үтеп инә, улар шул әйтелешкә яйлаштырыла һәм, айырым һүҙ булып китеп, телде байыта. Әгәр башҡорт теленең аңлатма һүҙен алып ҡараһаң, унда бик күп һүҙҙәрҙең сит телдәрҙән ингәнлеген күрергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта башҡа халыҡтар ҙа үҙ телдәрен башҡорт теле аша байыта.

Шул сәбәпле, әгәр ер йөҙөндә берәй тел юҡҡа сыҡһа, уның менән бергә тотош бер милләт, халыҡ юҡҡа сыға тигән һүҙ. Телдәрҙе һаҡлау – кешенең биологик төрлөлөгөн һаҡлау ул. Тарихты байҡаһаң, айырым бер милләттәрҙе тотош юҡ итеү сәйәсәте төрлө осорҙарҙа бик әүҙем алып барылғанлығын да күрергә мөмкин ( диндә көсләп тағыу өсөн “тәре походтары”, фашизмдың йәһүдтәрҙе ҡырып бөтөрөү программаһы, совет дәүләтенең бар халыҡтарҙан берҙәм совет кешеһе эшләү сәйәсәте, бар донъяға бер “эсперанто” аралашыу теле яһау идеяһы һ. б.). Был юлды ҡыуыусылар һаман табылып тора, шуға донъяла телдәр һаны һаман кәмегәндән кәмей бара ла инде.





# Башватҡыс

Ҡыҙыҡлы тәжрибә

## Ньютон ҡулсалары



Һеҙҙең барығыҙ ҙа һабын ҡыуыҡтары өрөп уйнарға ярата. Кескәйҙәр өсөн генә түгел, өлкәндәргә лә мауыҡтырғыс уйын ул. Ҡояш нурҙарында ҡыуыҡ –шарҙар йәйғорҙоң төрлө төҫтәре менән уйнай! Һеҙ ул тамашаны ҙурайтылған экранға ла күсерә алаһығыҙ. Бының өсөн сиптәре глицерин йә бүтән май менән майланған рюмка өҫтөнә йәтеш итеп ҙур ғына ҡыуыҡты ултыртырға өйрәнергә кәрәк. Ҡыуыҡ ҙурыраҡ һәм тотороҡлораҡ булһын өсөн, һабынлы һыуға бер аҙ шәкәр ҡушыла.

Башта өҫтәл ситенә шәм яндырып ҡуйыла. Икенсе ситенә, бер метр самаһы арауыҡта йоҡа ғына үтә күренмәле ҡағыҙҙан эшләнгән экран беркетелә (берәйһе тотоп торһа ла ярай). Хәҙер инде шул ҡыуыҡты өрөп, стаканға ултыртып, экран менән шәм араһына урынлаштырырға ҡала. Ҡыуыҡты шәмгә түгел, ә экранға яҡыныраҡ килтерергә кәрәк. Бер аҙҙан һеҙҙең үтә күренмәле экранығыҙҙың кире яғында йәйғор ҡулсалары талғын ғына өҫтән аҫҡа хәрәкәт итә башлаясаҡ. Бына шулай, үҙ ҡулың менән эшләнгән йәйғорҙо үҙең ҡарай алаһың.

## Хикмәтле хикәйә



Ике малай көн һайын ат ярышы ойоштора икән. Көн һайын йә береһе, йә икенсеһе беренсе килә. Бер аҙҙан был бәйгеләр уларҙы ялҡыта башлаған.

– Әйҙә, – тип тәҡдим индергән шунда береһе. – Бәйге шартын үҙгәртәбеҙ. Хәҙер кемдең аты икенсе килә, шул еңеүсе булһын.

Бындай сәйер бәйгене тамаша ҡылырға халыҡ йыйылып китә. Ике малай бер һыҙыҡҡа баҫа. Стартҡа әмер бирә ҡазый, әммә малайҙар, аттарын тыйып, урындарынан ҡуҙғалмай.

– Һә-әй, шарты шулай булғас, улар тик торасаҡтар инде! – тип ҡысҡырыша тамашасылар. Шул саҡ малайҙар янына бер ҡарт килә лә, уларға ниҙер бышылдай. Тамашасылар абайлап өлгөргәнсе, малайҙар йән-фарман сабып сығып та китә.

Ҡарт малайҙарға нимә тип әйткән?

## Башыңды эшләт

1. Яуап дүрттән ҙур, биштән бәләкәй булһын өсөн 4 менән 5 һандары араһына ниндәй билдә ҡуйырға кәрәк?

2. Ниндәй һорауға ыңғай яуап биреп булмай?

3. Нимәне тик һул ҡул менән тоторға мөмкин?

4. Быны эшләгән кешенең үҙенә ул кәрәкмәй, уны һатып алған кеше уның менән файҙаланмай, ул кәрәккән кеше был хаҡта белмәй. Был нимә?

5. Бер сәс ҡырҡыусы былай тип хәбәр һалған:" Үҙебеҙҙең ҡаланан бер кешенең сәсен алғансы, мин ситтән ике кешенекен алыр инем!" Ни өсөн шулай тигән ул?

6. Сәйер һатыулашыу:
- Берәү күпме тора?
- Егерме һум.
- Ә ун ике?
- Ҡырҡ һум.
- Миңә йөҙ егерме кәрәк ине бит әле.
- Рәхим итегеҙ – алтмыш һум.
Был кеше нимә һатып алған?

**Башватҡыстың яуаптарын киләһе һанда уҡығыҙ.**

# КӨЛӘМӘСТӘР

Инша алдынан уҡытыусы:

– Борсолмағыҙ, барыһы ла ыңғай баһа алаҫаҡ, – тип йыуата.

– Ә ыңғай баһа ул нисә була? – тип һорайҙар унан.

– Нулдән юғарыраҡ!

* * *

**Имтихан башланырға тора. Тик береһе лә керергә ашыҡмай. Шул саҡ уҡытыусы сыға ла: ”Кем дә кем беренсе керә, шуға бер балға юғарыраҡ ҡуям,” – тип белдерә. Бер малай йүгереп сыға:**

**– Миңә өслө лә етә, беренсе керергә ризамын!**

* * *

Золушка король һарайына балға ашыға. Сәғәт ун бер тулып килә. Ҡапыл ул ултырған көймә ҡабаҡҡа әйләнә, аттары сысҡан булып китә. “Ҡәһәрең, бөгөн сәғәтте йәйге ваҡытҡа күсерергә онотҡанмын бит!” – тип уйлап ҡына өлгөрә ул.

* * *

**– Ни өсөн һин насар уҡыйһың? Ана, күршеңдә ҡара – көндәлегендә “дүрле” лә “бишле”ләр генә!**

**– Уның ата-әсәһе аҡыллыраҡтыр, күрәһең…**

* * *

– Мин ҡайһы саҡта үҙемде шул тиклем алйотмондор тип уйлап ҡуям. Кисә, мәҫәлән: таҫтамалды кер йыуыу машинаһы урынына һыуытҡысҡа һалып торам!..

– Минең дә шулай булғылап ҡуя ул…

– Таҫтамалды һин дә һыуытҡысҡа тығаһыңмы?

– Юҡ, мин дә һине алйот тип уйлап ҡуям…

* * *

**– Олатай, ҡыш көндәре бигерәк ҡыйын икән! Уйлап ҡара: юлдар таҙартылмай, машинаны йылытып алыу, тәгәрмәстәрҙе ҡышҡыға алыштырыу, тәҙрәләр туңа, мотор ҡабынмай… Быларға ике машиналыҡ аҡса китә бит!**

**– Ә һин, балам, былай этләнгәнсе, ике машина ал да ҡуй. Беҙ, бына, йәй көнө арбала, ә ҡышын санала йөрөй торғайныҡ.**

**Тышлыкта – Өфөләге Александр Матросов һәйкәле. З. Әбилев фотоһы.**


**АМАНАТ** ©

**Республика балалар-үҫмерҙәр журналы**

**Республиканский детско-юношеский журнал**

**№ 02 (795), Февраль, 2010**

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

**Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН**

Мөхәрририәт:

Артур СУРИН, Салауат СӘҒИТОВ, Артур ИҘЕЛБАЕВ, Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.
Айына бер тапҡыр башҡорт телендә сыға.
Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.
Издается с марта 1929 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.
Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныҡлыҡ ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612



БЕҘҘЕҢ АДРЕС:

450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.

450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:

баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 223-91-83;
бүлектәр – 277-74-80.
e-mail: amanat@yandex.ru
Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru



РЕКВИЗИТТАР:

г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала “АМАНАТ”
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО “УралСиб”,
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.

Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.

Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».

Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.



Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.



Баҫырға ҡул ҡуйылды 08.02.2010. Ҡағыҙ форматы 84х108 $^{1}/_{16}$. Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 17543. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0015.10

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

# Фотоға төштөк әле...





Әйҙә, дуҫ, танышып алайык:
Мин – Алакай.
Әйҙә һуң, гел бергә уйнайык,
Мин – нарыкай.
**Фаягөл ҠУНАҠБАЕВА.**
**Күмертау ҡалаһы.**



“Үҙең бүләк!” – тимә, әсәй,
Бына һиңә бүләгем.
Шул сәскәләй ҙур һәм матур
Булып үҫеү – теләгем.
**Алтынай СӘЛИХОВА.**
**Күгәрсен районы,**
**Яңауыл ауылы.**

Бәләкәйерәк булһам да,
Егет тигән даным бар! -
Арыҫландар ажарлығы
Йәшәй минең ҡанымда.
**Ләйсән АРЫҪЛАНОВА.**
**Баймаҡ районы,**
**2-се Эткол ауылы.**





Олимпия трассаһылай
Үрнәк тауы үрҙәре!
Ябай санала ла бында
Уҙып була елдәрҙе.
**Әлиә ИСКӘНЙӘРОВА.**
**Хәйбулла районы,**
**Үрнәк ауылы.**

Иғтибар иткәнһегеҙҙер, уҡыусылар: элек ай һайын сығып килгән “Фотоға төштөк әле...” рубрикаһы хәҙер һирәкләнде. Сәбәбе ябай – “Аманат” почтаһында был темаға тура килерлек ҡыҙыҡлы ла, сифатлы ла фотолар әҙәйҙе. Унда ғәҙәти портреттар, йә кескәй балалар төшкән фотолар өҫтөнлөк алды. Пленкалы фотоаппараттарҙы цифрлылар алыштырған осорҙа беҙҙең электрон почтаға ла фотоһүрәттәр бик һирәк килеп эләгә.

Ә бит заманында был рубрика фотоконкурс булараҡ баш алғайны. Йәғни, бында фото сығарыу ғына түгел, эләгеүе лә ҡыйын ине. Әле лә, моғайын, камералы һәм телефонында фотообьектив та булған кешеләр бихисаптыр. Ана шуларҙан яңы эштәр көтәбеҙ. Талаптар шул уҡ: фотоһүрәт ҡыҙыҡлы булһын, уға йәтеш кенә текст та яҙығыҙ.

**Мөхәрририәт.**

## УНЫҢ ФОТОЛАРЫНДА – БӨТӨН БАШҠОРТОСТАН




Республикабыҙҙа рәссам-фотограф Нәсих Хәлисовтың ижадын белмәгән кеше юҡтыр. Ул Башҡортостан Республикаһында Спорт һәм сәләмәт тормош йылы (2003), Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығы (2007), Башҡортостан республикаһында Ғаиләгә социаль ярҙам йылы (2008) һәм былтырғы Йәштәрҙең башланғыстарын яҡлау һәм үҫтереү йылы эмблемаларының авторы. Нәсих Хөббөтдин улы “Башҡортостан” гәзитендә биҙәлеш мөхәррире булып эшләй.

Буласаҡ рәссам 5 – 6-сы синыфтарҙа фото түңәрәгенә йөрөй һәм үҙен серле донъяға юлыҡҡандай хис итә. Республика художество мәктәп-интернатында уҡыған саҡта ла был сауығыуын ташламай. Шул ваҡыттарҙан алып ҡулынан фотоаппарат төшмәй, тиерлек. Тормоштағы ҡыҙыҡлы мәлдәр, илаһи күренештәр фотографтың обьективынан ситтә ҡалмай.

Нәсих Хөббөтдин улының бай һәм ҙур архивында республикабыҙҙың билдәле шәхестәренең уникаль фотоһүрәттәре, Башҡортостан тарихы өсөн әһәмиәтле ваҡиғаларҙан фоторепортаждар һаҡлана. Улар йыш ҡына төрлө баҫмаларҙың йөкмәткеһен байыта. Фотографтың эштәре ябай фото ғына түгел, ә кеше һәм ил яҙмышы тураһында уйландырырлыҡ әҫәрҙәргә тиң.

**Нурзиә ЙЫЛҠЫБАЕВА.**



















Журналдың индексы – 73317